✓ ***Ожмахта ике фәрештә осраша. Берәүһе гел генә болоттар өҫтөнә ятып ял итә, икенсеһе бер туҡтауһыҙ Ерҙән Хоҙай янына оса. Ял итеп ятыусы фәрештә икенсеһенән: "Ниңә һин туҡтауһыҙ тегендә-бында осаһың ул?"- тип һорай ҡуя. "Мин Ерҙәге кешеләрҙең "Хоҙайым, ярҙам ит!" тигән ялбарыуҙарын Аллаға ташыйым. Ә бына һин ниңә һәр ваҡыт ял итәһең?" - ти беренсе фәрештә. "Ә мин "Рәхмәт һиңә, Аллам!" тигән хәбәрҙе ташырға тейешмен..." тип яуаплай икенсе фәрештә...***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө



15 - 21 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№46 (620)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡатын- ҡыҙҙың көсө...**

унын көсһеҙлегендә



3,6

**Бәшкәрт илендә**



7

**Аҡсаның милләте юҡ,**



8-9 ә малтабарҙың милләте бар

**"Йәшел сауҡалыҡ" дауаһы...**

тәнгә лә, йәнгә лә шифа



12

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Милли матбуғатыбыҙ баҫмалары күп һәм төрлө. Туған телебеҙҙәге гәзит-журналдарҙа, шул иҫәптән "Киске Өфө" биттәрендә, низәр хаҡында уҡырға теләр инегеҙ?

***Фәнил КҮЗБӘКОВ, журналист, шағир, филология фәндәре докторы, профессор:*** Эшем буйынса республикабыҙҙың матбуғат торошон күҙәтеп барам, шул уҡ ваҡытта беҙгә Рәсәй, донъя матбуғаты өлкәһендә лә хәбәрҙар булыу мотлаҡ. Бөгөнгө мәғлүмәт сараларының күп төрлөлөгө, айырыуса уларҙың электрон төрҙәре әүҙемләшкән заманда баҫма матбуғаттың хәле бөтәбеҙгә лә мәғлүм: гәзит-журналдарға яҙылыусылар һаны йылдан-йыл кәмей бара. Ләкин быны мин "Киске Өфө" гәзитенә ҡарата әйтмәҫ инем, сөнки ул нәшер ителә башлағандан алып тотороҡло тираж менән сығып килә. "Киске Өфө"нөң башҡа баҫмаларҙан айырылып торған үҙ йөҙө, үҙ һүҙе булыуы, һәр һанында уҡыусыларҙы уйландырырлыҡ, уларҙы позитив йүнәлешкә көйләүсе материалдар бирелеүе миңә оҡшай. Шул уҡ ваҡытта ошо позитив янында - тәнҡит тип әйтмәйем - аналитик материалдарҙы ла, жанр төрлөлөгөн дә күрге килә. Был гәзитебеҙҙең уҡымлылығын арттырасаҡ ҡына, әлбиттә. Теге йәки был өлкә буйынса абруйлы белгестәрҙе йәлеп итеү, уларҙың донъяуи күҙәтеү-күҙаллауҙарын биреп барыу шул уҡ "Монолог", "Диалог"тар менән бер рәттән, ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырасаҡ. Был тема төрлөләгән дә, авторҙар исемлеген дә байытасаҡ. Белгестәр, тигәндән, уларҙы мотлаҡ баш ҡалабыҙҙан ғына түгел, ә башҡа ҡала һәм райондарыбыҙҙан да йәлеп итергә була. Беҙ белеп бөтөрмәһәк тә, ауыл ерҙәрендә бик күп абруйлы шәхестәр йәшәй. Мәҫәлән, Бөрйән ҡурсаулығынан биология фәндәре кандидаты Әғләм Шәриповтың һәр сығышы - үҙе бер ваҡиға, тип әйтер инем. "Киске Өфө" ана шундай үҙенсәлекле яңы авторҙар исемен асыуҙы киләсәктә лә дауам итһен ине. Белеүемсә, "Киске Өфө" урындарҙа йыш булып, халыҡ менән күҙмә-күҙ осрашып, кәңәшләшеп эшләй; туған тел, тарихыбыҙ һәм мәҙәниәтебеҙ мәсьәләләрен яҡтыртыу менән бер рәттән, сәләмәт тормош рәүешен арыу-талыуһыҙ пропагандалай. Тимәк, "Киске Өфө" милләтебеҙ мәсьәләләренә битараф булмаған һәр кемдең йөрәгенә юл табасаҡ, тип ышанам.

***Әсләм АРЫҪЛАНОВ, һәүәҫкәр тарихсы, крайҙы өйрәнеүсе:*** Гәзит өсөн ун ике йыл әллә ни күп тә түгел, ләкин шул арала ғына ла "Киске Өфө" "йөҙйәшәр" коллегалары араһында лайыҡлы урын яулап ҡына ҡалманы, бәлки, уҡымлылығы, кеше күңеленә ятышлы йылылығы, мәғлүмәтлелеге буйынса баш ҡалабыҙҙа ғына түгел, республика райондарында ла тиҫтәләгән мендәрҙең күңелен яулап өлгөрҙө. Миңә айырыуса был гәзиттең халҡыбыҙ тарихына, әсә теленә, йола һәм традицияларыбыҙға битараф булмауы оҡшай. Шулай булырға тейеш тә ул, юғиһә, быуаттар буйы ошо ерҙе төйәк итеп, үҙ ерен генә яҡлап түгел, кәрәк саҡта Рәсәй азатлығы өсөн дә ҡаһарманлыҡ өлгөләре күрһәткән, үҙ илендә башҡа бик күп халыҡтарҙы һыйындырып, татыу, тыныс ғүмер кисереүсе халҡыбыҙҙың тарихын һанламау, ошо еребеҙҙә йәшәп тә, халыҡса әйткәндә, "ашаған табағына" төкөрөүселәр ҙә бар, осрап тора - шуныһы бигерәк күңелде ҡыра. Мәҫәлән, ана шундай факттарҙың береһенә генә туҡталмаҡсымын: күптән түгел Г.Обыденнова менән В.Иванов тигән авторҙарҙың, йәнәһе лә, кемдәр өсөндөр дәреслек рәүешендә сығарылған "Уфаведение" тип аталған китабы ҡулға килеп эләкте. Унда бөгөнгө баш ҡалабыҙ нигеҙе булған боронғо Башҡорт ҡалаһы, йәки Өфө-II ҡаласығы тураһындағы хәҡиҡәт тулыһынса инҡар ителә. Авторҙар бының менән генә сикләнмәгән, ә археологик ҡаҙыныуҙар һәм тарихи эҙләнеүҙәр һөҙөмтәләрен дә танырға теләмәй, ошо асыштың, күп йыллыҡ эҙләнеүҙәрҙең авторҙарын - билдәле башҡорт ғалимдарының исемдәрен дә, уларҙың хеҙмәттәрен дә пыран-заран килтерә. Уларҙың фекерен "Аргументы и факты" гәзитендә С. Шушпанов тигән журналист дауам итә һәм башҡорт ғалимдарын "дөмбәҫләй" бирә. Ошо айҡанлы әйтергә теләгәнем шул: башҡорт матбуғат баҫмалары халҡыбыҙ тарихына, уның шәхестәренә, туған телебеҙ һәм рухиәтебеҙ хазиналарына ҡағылышлы әлегеләй яла яғыуҙар, кәмһетеүҙәргә ауыҙ йомоп, өндәшмәйенсә ҡалмаһын, үҙебеҙҙе - яҡлай, ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлай алырлыҡ сығыштар ойошторһон, редакция мәҡәләләре баҫтырып торһон ине. Юғиһә, биткә сабалар, ә беҙ, һәр ялаға төплө дәлилдәр менән яуап биреү урынына, икенсе яңаҡты ҡуйып, өнһөҙ-тынһыҙ ғына үткәреп ебәреү яғын ҡарайбыҙ. Мин, әлбиттә, ыҙғыш-талашҡа өндәмәйем гәзиттәребеҙҙе, ләкин тыныс тонда, иң мө-һиме, дәлилле яуап бирә барыу кәрәктер, тигән уйҙамын.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АСЫҠ ҺАУАЛА - ТАМАША

**Өфө амфитеатры "open air" уҙғарыу өсөн һаҡланасаҡ. Хәҙер Конгресс-холл артындағы майҙанда төҙөкләндереү буйынса эштәр бара, тип хәбәр иттеләр "Өфө-2015" ШОС һәм БРИКС офис-төркөмө"нән. 9000 квадрат метр майҙанда милли орнамент формаһында һигеҙ төҫтән торған тротуар плиткалары түшәләсәк.**



Амфитеатр асыҡ һауала саралар уҙғарыу өсөн кәрәкле инженер коммуникациялары менән йыһазландырыла. 1 декабргә тиклем майҙансыҡты электр менән тәьмин итеү өсөн бер нисә километр кабель һалынасаҡ.

Өфө амфитеатры эргәһендә суйын ҡоймалар һәм 70 фонарь ҡуйылған, гранит баҫҡыстар монтажланған, эко-плитка түшәлгән. 1700 кв. метр майҙандағы автомобиль туҡталҡаһы тулыһынса асфальтланған.

"Өфө-2015" ШОС һәм БРИКС офис-төркөмө"ндә аңлатыуҙарынса, киләһе йылдың июлендә, саммиттар үткәреү ваҡытында, Өфө амфитеатрында ете тирмәнән торған экспозиция ойоштороласаҡ. Уның барлыҡҡа килеү кәрәклеге халыҡ-ара сараларҙың форматы һәм регламенты менән бәйле. Федераль талаптарға ярашлы, саммиттарҙы ҡабул итеүсе төбәк сәйәси сара ҡунаҡтары һәм ҡатнашыусылары ҡарай алырлыҡ үҙ күргәҙмәһенә эйә булырға тейеш. "Этно-ауыл" Башҡортостандың үҙенсәлекле визит карточкаһына әйләнәсәк, унда республика тормошоноң - мәҙәниәттән алып инновация технологияларына тиклем - бөтә өлкәләрен күрһәтеү күҙаллана. Халыҡ-ара форум эше тамамланғандан һуң, экспозиция бер нисә ай дауамында ҡала халҡы өсөн асыҡ буласаҡ. Өфө амфитеатрында концерттар һәм башҡа ҡала сараларын уҙғарыу мөмкинлеге ярты йылдан һуң - 2015 йылдың яҙында барлыҡҡа киләсәк.

Өфө амфитеатры - Конгресс-холл артындағы майҙан, популяр киң мәҙәни-күмәк саралар уҙғарыу урыны. Был майҙансыҡта ике симфоник "open air" һәм асыҡ кино күрһәтеүҙәр ҙур уңыш менән үтте.

✓ ***Мәхмүт Ҡашғариҙың "Диуани лөғәт-әт-төрк" китабында телгә алынған 22 бөйөк төрки халҡы араһында башҡорттарҙың да телгә алыныуы ҡыуандыра.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Милли матбуғатыбыҙ баҫмалары күп һәм төрлө. Тыуған телебеҙҙәге гәзит-журналдарҙа, шул иҫәптән "Киске Өфө" биттәрендә, ниҙәр хаҡында уҡырға теләр инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА, педагогика фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Башҡорт телендәге матбуғат баҫмаларының нисек сығып килеүе, унда ниндәй темаларға өҫтөнлөк бирелеүен күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа, күҙәтеп барырға тырышам, ҡайһы берҙәрен өйгә алдырып та уҡыйым. Шуларҙың береһе - "Киске Өфө". Һүҙ ҙә юҡ, һәйбәт гәзит, әлбиттә. Халҡыбыҙ рухиәтен байытыуға күп көс һала, бик күп тарихи материалдар бирелә. Гәзит уҡыусылар фекерҙәрен дә уҡый, ишетә йөрөйөм: маҡтау һүҙҙәре күп әйтелә, һәм "Киске Өфө" лайыҡ бындай баһаға. Шул уҡ ваҡытта беҙ гел маҡташып ҡына ла ултырырға тейеш түгелбеҙҙер, сөнки күпме уҡыусы - шунса фекер. Ә фекер йөрөтмәгән кеше гәзит уҡыйҙыр тип уйламайым да. Гәзитебеҙҙе тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ, йөкмәткелерәк итеү өсөн фекер төрлөлөгөнә лә ҡолаҡ һалып алыу кәрәктер, тим. Шул юҫыҡта бер нисә тәҡдимемде әйтеп китәйем, булмаһа. Зыялыларыбыҙ күп, шөкөр, ләкин гәзитебеҙҙә уларҙың күпселеге йә яҙыусы, йә артист, йә гуманитар өлкә буйынса ғалим. Ә ҡайҙа беҙҙең техник өлкәләге, ауыл хужалығы белгестәре, химиктар, математиктар, физиктар, нефтселәр, экологтар, бармы улар?

Икенсе фекерем шул: киләһе йыл фашизмды ояһында дөмөктөрөп, бөйөк Еңеү яулауыбыҙға 75 йыл тула. Һуғышта ҡатнашып, иҫән ҡайтҡан ветерандарыбыҙ ҙа бик аҙ ҡалды. Әле бында, әле тегендә неофашизм баш ҡалҡытмаҡсы булып, ағыуын сәскеләп торған ошондай киҫкен мәлдәрҙә беҙ Бөйөк Ватан һуғышы һабаҡтары, Еңеү һәм киләһе быуындар хаҡына ғүмерҙәрен ҡорбан иткән ҡаһарман яугирҙарыбыҙ хаҡында ҡайта-ҡайта һөйләргә тейешбеҙҙер гәзит уҡыусыларға, бигерәк тә йәш быуын вәкилдәренә. Юғиһә, был хаҡта бөтөнләй бер ни белмәгән балалар бар. Хатта ки һуғышта ҡатнашҡан үҙ туғандары - ҡартаталары, олаталарының да кем икәнен, ҡайһы тарафтарҙа, ниндәй яу яланында ятып ҡалыуын да белмәйҙәр. Үткәндәребеҙ, бигерәк тә Башҡортостан тарихы, уның сағыу шәхестәре хаҡында һәр бер һанда белешмә генә булһа ла биреп барыу бер кемгә лә ҡамасауламаҫ ине, тигән фекерҙәмен.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КҮҢЕЛ БОШОНОРҒА...

## сәбәп тә юҡ һымаҡ

**Зәйтүнә ШӘРИПОВА, БДУ профессоры, филология фәндәре докторы:** Бер нисә быуын әҙәбиәтселәрҙе тәрбиәләүсе "Шоңҡар" әҙәби ижад берекмәһенең 80 йыллыҡ юбилейына әҙерлек барышында йәштәрҙең ижад емештәрен тикшереп ултырам. Талантлы студенттарҙың шиғырҙарын уҡыған арала Буранбай Исҡужин яҙған юлдар иҫемә килеп төштө:

*"Хәлемде һорап килмәгеҙ,*
*Хәлдәрем әүәлгесә.*
*Баш ҡалҡытһам - ҡылыс төшә,*
*Эйелһәм - битем бешә.*
*Йөрөмәгеҙ хәл һорашып,*
*Былай ҙа эсем бошоҡ.*
*Теләһә кем инеп-сығып,*
*Күңелем тишек-тошоҡ"*, - тип яҙған ул. Һуңғы арала беҙҙең зыялыларҙың да күңелдәре төшөп, уйға батып йөрөйҙәр һымаҡ тойола. Донъялағы болалар, ҡан ҡойоштар, кешеләрҙең бер-береһен йәберләүенә ҡарап, борсолмай ҙа булмай шул. Илдәге демократик дәүләт ҡоролошо һәр кемдең етеш тормош көтөүен, тотош илдең социаль-иҡтисади хәле юғары кимәлдә булыуын күҙаллай бит инде. Шуға күрә, етеш йәшәйем тигән кешегә бөтөн мөмкинлектәр асыҡ - теләгән эште башҡар, аҡсаны көрәп ал, сит илдәрҙә ял ит, бер һүҙ менән әйткәндә, тырышһаң, типтереп йәшәргә була. Әммә халыҡҡа ниндәй генә мөмкинлектәр бирмә, бөтәһе лә тормошон яйлай алмай. Быны нимәнән сығып әйтәм? "Шоңҡар" әҙәби ижад берекмәһенә йөрөүсе талантлы студенттарҙың ижадында бөгөнгө ысынбарлыҡ сағыла ла инде. Уларҙың демократия идеяларының ғәмәлгә ашмауын күреп әсенеп, ауылдарҙа эскеселәрҙән бигерәк зимагорҙар күбәйеүенә көйөнөп, тыуған яҡ, ил өсөн борсолоп яҙған шиғырҙары күп. Бөгөн йәштәр генә түгел, өлкәндәр ҙә кешене күкрәк киреп, яҡшы донъя көтөргә өйрәтерлек хәлдә түгелбеҙ. Үҙең серегән бай, олигарх булмаһаң, аҡсалата ярҙам итеп тә булмай. Интеллигенция вәкилдәре халыҡтың тормошон яҡшыртыу өсөн нишләргә лә белмәй. Һүҙ әйтһәләр, халыҡ һүҙҙән дә ялҡып бөткән хәҙер. Ни тиһәң дә, бөгөн тормош шул тиклем тиҙ үҙгәрә, хатта уға яраҡлашып өлгөрә алмайбыҙ. СССР заманындағы кеүек, дәүләт тарафынан ниндәйҙер тотороҡло иҡтисади-социаль шарттар булдырылғанда, киләсәгең өсөн ҡайғырмай, ышаныс менән йәшәргә мөмкин булыр ҙа ине. Шулай ҙа, оло быуын кешеләре үҙгәрештәргә күнегеп бөтә алмаған хәлдә лә, йәштәр реаль эштәргә тотонһон ине ул.

Уйлай китһәң, башҡорттоң тормошо бер ҡасан да еңел булмаған. Әммә Европа һәм Азия ҡитғалары буйлап тегеләй-былай күсенеп йөрөгән халыҡтарҙан баҫылып, юғалып ҡалмауыбыҙға шатланырға кәрәк беҙгә. Тарих биттәренә күҙ һалһаҡ, Мәхмүт Ҡашғариҙың "Диуани лөғәт-әт-төрк" китабында телгә алынған 22 бөйөк төрки халҡы араһында башҡорттарҙың да телгә алыныуы, ошо исемлектәге милләттәрҙең бөгөнгө көндә тик алтауһы ғына исемен үҙгәртмәй, юғалмай һаҡланып ҡалыуы, беҙҙең дә йәшәп ятыуыбыҙ ҡыуандыра. Шуға күрә, оптимист булырға, ең һыҙғанып эшләп йәшәргә тырышырға кәрәк беҙгә.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле бара. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн ноябрҙә **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән **50673** индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

● Ноябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.




● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич рәйеслегендәге кәңәшмәлә ҡатнашты. Унда Башҡортостан Республикаһы буйынса яңы Баш федераль инспектор Андрей Чечеватов менән таныштырҙылар. Ул быға тиклем Киров өлкәһе буйынса Баш федераль инспектор вазифаһын башҡарған. Башҡортостан Республикаһы буйынса элекке Баш федераль инспектор Петр Капишников пенсия йәшенә етеү сәбәпле вазифанан бушатылды.

✓ Өфөлә Рәсәй Именлек советы секретары Николай Патрушевтың һәм РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабичтың күсмә кәңәшмәһе уҙҙы. Кәңәшмәлә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов сығыш яһаны. Николай Патрушев үҙ сығышында донъялағы бөтә урмандарҙың 20 проценттан ашыуы Рәсәйҙең өлөшөнә тура килеүен, был тәбиғәт ресурсы менән ҡулланыу һөҙөмтәләренең ҡәнәғәтләнерлек булмауын билдәләп үтте.

✓ Рәсәйҙең ЮНЕСКО составына инеүенең 60 йыллығына арналған "Хәбәрҙәре"нең быйылғы 21-се һанында Башҡортостан Президенты, Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһы ағзаһы Рөстәм Хәмитовтың мәҡәләһе баҫылған. Төбәк башлығы баҫмаға республиканың ЮНЕСКО менән 15 йыллыҡ хеҙмәттәшлек тәжрибәһе, был халыҡ-ара ойошманың штаб-фатирында Башҡортостандың былтырғы презентацияһы тураһында һөйләй. Был рәсми баҫма ошо халыҡ-ара ойошманың 195 ағза булған илдәрендә таратыла.

✓ Башҡорт дәүләт университеты һәм Сколково фән һәм технологиялар институты ғилми-тикшеренеү эштәре уҙғарыу тураһында килешеү төҙөнө. Документ ғилми-тикшеренеү, инновация һәм уҡыу эшмәкәрлегендә уртаҡ эште, тейешле һөнәрҙәр буйынса уҡытыу курстарын әҙерләүҙе һәм ғәмәлгә ашырыуҙы, белгестәр менән алмашыуҙы һәм бергәләп магистрҙар әҙерләүҙе күҙаллай.

✓ Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың башҡорт әҙәбиәте һәм крайҙы өйрәнеү бүлегендә билдәле башҡорт шағиры Ғәзим Шафиҡовтың иҫтәлегенә арналған сара уҙҙы. Быйыл 1 октябрҙә республиканың әҙәби йәмәғәтселегенә уның 75 йыллығын билдәләне.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Боронғо легендала һөйләнелеүенсә, Аллаһы Тәғәлә ҡатын-ҡыҙҙы барлыҡҡа килтерер алдынан бер һауытҡа ҡайнар ҡояш нурҙарын, шишмә сафлығын, сәскәләр нәфислеген һәм матурлығын, көҙ муллығын, күбәләктең елпелдәклеген, аҡҡош тоғролоғон, хамелеондың тиҙ үҙгәреү һәләтен, болоттарҙың илаҡлығын, һыйыр баҫалҡылығын, ишәк тиҫкәрелеген, сәүкәнең күп һүҙлелеген, төлкө мутлығын, бер аҙ йылан мәкерлеген һәм кенәселлеген йыйған. Һауытта йыйылғандарҙы яҡшылап бутап, камил Ҡатын-ҡыҙҙы яралтҡан...**



# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ КӨСӨ...

## уның көсһөҙлөгөндә

### Әсәйем, ике апайым...

Минең өсөн ҡатын-ҡыҙ һәр ваҡыт йомаҡ булды. Ул үҙенә ылыҡтыра, шул уҡ ваҡытта серле, сер булып ҡала. Минең өсөн генә түгел, башҡа ир-егеттәр өсөн дә ул шулай. Мин ҡатын-ҡыҙға табындым, әммә бернисәүһе генә минең идеалым булып ҡалды. Йәшлек йылдарында ҡатын-ҡыҙ арҡаһында кисергән күтәренке рух, күңел ҡайтыу, төңөлөүҙәр, ҡәнәғәтһеҙлек, өмөтһөҙлөктәр хәтеремә аҡ һәм ҡара һыҙаттар булып уйылды. Уларҙың барыһын да бөгөнгөләй иҫләйем.

Миңә ете йәш тирәһе булғандыр. Өйҙә бер үҙем генә инем. Картуф утарға тип, баҡсаға сыҡтым. Баҡса ап-аҡ сәскәгә күмелгән. Оҙаҡ та уйлап тормай, тәпкене ташланым да, әсәйемә сәскә бәйләме йыя башланым. Баҡсалағы бөтә картуфтың тиерлек сәскәһен йыйғанмын, етмәһә, матурыраҡ булһын тип, гөлләмә уртаһына помидорҙың һап-һары сәскәләрен дә өҫтәгәнмен. Минең "эшемде" күреп ҡалған күрше апай: "Ну, малай, әсәйеңдән бөгөн эләгә, эштән ҡайтҡас та уға был эшең тураһында әйтәм!"- тип күңелемде төшөрҙө. Ҡурҡыуым юҡҡа булды: әсәйем, йылмайып, сәскәләрҙе ҡулына алды ла: "Рәхмәт, улым, бик матур сәскәләр... Картуфыңды йәшәп була, сәскәһеҙ - юҡ", - тине. Күп йылдар үткәс, мин шундай һығымтаға килдем: әсәйем миндә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата иғтибарлы, хәстәрлекле ир-егет тәрбиәләргә теләгәндер.

Беҙҙең өйҙә өс ҡатын-ҡыҙ ине: әсәйем һәм ике апайым. Мин үҙемде уларҙы яҡлаусы итеп тоя инем. Көсөмдән килгәнсә уларға ярҙам итергә тырыштым. Бер ваҡыт күрше урамда йәшәгән малай әсәйем хаҡында: "Һинең әсәйең йөк аты кеүек..."- тигән һүҙҙәр ысҡындырҙы, күрәһең, өйҙәрендәге ололарҙың һүҙен ҡабатлағандыр инде. "Минең әсәйемме йөк аты? Тағы бер ҡабатла әле!" - тип уға ташландым. "Ат! Ат! Әсәйең эштән башҡа бер ни күрмәй, бер ни белмәй!" Мин үҙемдән олораҡ та, көслөрәк тә малайға ҡаршы һуғыша башланым. Ул мине еңел генә һуғып осора торҙо, мин тағы ла уға ташлана торҙом. Ап-аҡ күлдәгем ҡап-ҡара булып бысранды, маңлай яраланды, танауҙан ҡан аға башланы. Ҡояшлы көн ҡыҙыл төҫкә әйләнде. Мин дошманымды еңеремә ышанмаһам да, һөжүмемде дауам иттем. Беҙҙе малайҙың ағаһы айырҙы һәм ҡусыһына: "Етәр! Ысынлап та, уның әсәһе ауылда иң һәйбәте, иң матуры! Хәҙер үк ғәфү үтен! Ғәфү үтенмәһәң, мин уның яҡлы буласаҡ!"- тип екерҙе. Дошманым теш араһынан: "Ғәфү ит, мин яңылыштҡанмын..." - тине. Был һүҙҙәрҙе ишетеп, мин ҡысҡырып илап ебәрҙем...

Өйләнгәс, ниндәй генә хәл килеп сыҡһа ла, әсәйем килене менән бер һүҙле булды. Ул һәр саҡ: "Килен хаҡлы булмаһа ла, ғәфү үтен..."- тип өйрәтә ине.

### Тәнен һатҡан ҡыҙ

Армияла хеҙмәт иткәндә Рига ҡалаһының тимер юл вокзалында поезд көтөргә тура килде. Һыуыҡ көҙ көнө, ямғыр һибәләй. Ҡапыл вокзал уртаһында баҫып торған йәш ҡыҙға иғтибар иттем. Ҡыҙға егерме йәштәр тирәһе булғандыр. Ул миңә донъя йөҙөндәге иң матур, хатта Ерҙәге түгел, ә ҡайҙандыр икенсе планетанан килгән нәфис йән эйәһе булып тойолдо. Әйтерһең, ул бында Ерҙәге ығы-зығыны күреп китер өсөн генә килгән. Мин вокзал алдындағы сәскә салонына индем. Унда ниндәй генә гөлләмәләр юҡ ине! Кеҫәләге аҡсам өс ҡәнәфер алырға ғына етте. Ҡулымдағы сәскәләремде тотоп, вокзалға индем. Ҡыҙ шул уҡ урында баҫып тора. Үтеп йөрөүселәргә ғорур, тәкәббер ҡараш ташлай. Кемделер көткән кеүек. Сәскәләремде нисек бүләк итергә белмәйем, күңелемдән генә төрлө матур һүҙҙәр барлайым. Быны эргәмә ялтас башлы бер ир килеп баҫты һәм ҡыҙға ымлап: "Һалдат, был фәхишәне алғың киләме? Ләкин уның хаҡы ҡиммәт. Килешербеҙ..."- тине. Минең өсөн көн төнгә әйләнде, баяғы илаһи хистәрем ҡапыл юҡҡа сыҡты. Ҡаршымда торған иргә һуҡҡым килде, ләкин үҙемде тотоп ҡалдым. Тешемде ҡыҫып, ситкә китә һалдым. Тынысланғас, сәскәләрҙе оҙон сират осонда баҫып торған оло йәштәге апайға бирҙем. Ул: "Ни өсөн миңә?" - тигәс, "Һеҙ әсәйемә оҡшағанһығыҙ", - тип яуапланым. Апай күҙ алдымда үҙгәреп, йәшәреп киткәндәй булды.

Урамға сыҡтым. Кеше күп йөрөгән урында шөкәтһеҙ бер ир ҡыҙғаныс тауыш менән хәйер һорап ултыра ине. Үтеүселәр уның йөҙөнә ҡарамаҫҡа тырышып, эргәһендәге ҡатырға ҡапҡа тимер аҡса ырғытып, тиҙерәк китеү яғын ҡарай... Ҡыҙ тәнен һатһа, был гәрип үҙенең бәхетһеҙлеге менән һатыу итә. Улар араһында айырма юҡ түгелме? Күп йылдар үтһә лә, тормошомдоң ошо көнөнә әле лә әйләнеп ҡайтам. Мөхәббәт һәм нәфрәт, яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, тоғролоҡ һәм хыянат, фәрештә һәм шайтан сиам игеҙәктәре кеүек, бер үк кешелә йәшәй ала. Уларҙы айырыуы мөмкин түгел. Бигерәк тә бөгөнгө көндә.

### Ниңә үҙгәрҙегеҙ?

Донъяла гүзәл ҡыҙҙар, ҡатындар, әсәйҙәр, өләсәйҙәр бар. Улар - беҙҙең тормош йәме, ғаилә усағын йылытыусы. Н. Некрасов "Есть женщины в русских селениях" тип яҙған. Әммә хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙы үҙгәрҙе. Егерме беренсе быуатта ул уҫал, тупаҫ, әҙәпһеҙ затҡа әйләнде. Ни өсөн?

Минеңсә, ҡатын-ҡыҙға беренсе сиратта йәмғиәт кире тәьҫир итте. Хәҙерге заман йәмғиәте ҡатын-ҡыҙҙы эшсе көсө, матди ҡиммәттәр табыусы, ғаиләне аҫраусы тип ҡабул итә. Ул ир-егет менән бер рәттән эшләй. Эштән һуң юл ыңғайында кәрәк-яраҡ һатып алып, хәлдән тайып ҡайтып инә. Өйҙә уны ире, балалары, аш бүлмәһе, һауыт-һаба көтә. Иртәгәһенә шул уҡ хәл тағы ҡабатлана... Йылмайыу, наҙлылыҡ өсөн ваҡыт юҡ. Күптән түгел бер журналда Франция ҡатын-ҡыҙҙарының йәшәү рәүеше хаҡында уҡыным. Мәҡәләне тулыһынса ҡабатламайынса, бер фактта ғына туҡталам: француз ҡатыны ике килонан ауырыраҡ йөк күтәрмәй! Йәғни йөк эшкә тотоп йөрөгән сумканан ауыр түгел. Беҙҙең ҡатындар шулай йәшәһен ине! Беҙ, ир-егеттәр, ғаиләләге беренселекте ҡатындарға биреп, әрәмтамаҡ хәленә ҡалғанбыҙ түгелме (был айырым һөйләшеү темаһы, әлбиттә)? Минең бер танышым, уға ниндәй генә һорау бирһәң дә, бер төрлө яуап бирә: "Мин бер нәмә лә белмәйем, ҡатынымдан һора, ул белә, ул хәл итә..."

Мәктәптә эшләгәндә уҡыусыларыма "Өйөгөҙҙә ғаиләне кем аҫрай?" тигән һорау бирҙем. Асыҡлауымса, ғаиләлә башлыса ҡатын-ҡыҙ эшләй (бер генә түгел, бер юлы ике-өс эштә). Ә ир-егеттәр ҡайҙа? Улар Обломов кеүек, диванда ята, телевизор ҡарай. Мәшәҡәтле эш көнө, һуңынан ғаиләне киске аш менән һыйлау, балаларҙың дәресен тикшереү... Ошоларҙан һуң ҡатын-ҡыҙҙан ниндәй наҙ, йомшаҡлыҡ талап итеп була? Элек ҡатын-ҡыҙҙар өсөн махсус уҡыу йорттары, институттар булған. Бында уларҙы әҙәбиәт, математика һ.б. фәндәр менән бер рәттән, аш-һыу әҙерләү оҫталығына, бала тәрбиәләүгә өйрәткәндәр. Бер һүҙ менән әйткәндә, буласаҡ ҡатын, әсәй, оҫта ҡуллы хужабикә тәрбиәләгәндәр. Хәҙерге заман мәктәбендә ҡыҙҙар егеттәр менән бергә противогаз кейеп йүгерергә, автомат йыйырға, һүтергә өйрәнә...

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## ЙӨРӘГЕНДӘ ХАЛҠЫ БУЛҒАНДЫҢ...

**"Киске Өфө" гәзите йөҙөндә мин үҙемдең рухташ, серҙәш, ижадташ дуҫымды таптым һәм быны менән ғорурланып йәшәйем, илһамланып эшләйем һәм ижад итәм.**

Ижад, тигәндән, гәзитемә рәхмәтлемен: бер нисә һанда "Әсәйем һабаҡтары" тигән шиғырҙар шәлкемем баҫылып сыҡты. Был минең өсөн бик ҙур ваҡиға һәм ҡыуаныс булды. "Әсәйем һабаҡтары"н тулыһынса "Китап" нәшриәтенә әҙерләп бирҙем, тиҙҙән ул айырым китап булып донъя күрәсәк, Алла бойорһа. Был мәғлүмәтте мин "Киске Өфө"лә баҫылған шиғырҙарымды уҡып, дауамы тағы ла буламы, тип һораусы гәзит уҡыусыларға яуап рәүешендә яҙам.

Әйткәндәй, гәзиттең тоғро дуҫтары, төплө һәм мәғлүмәтле авторҙарының күплегенә ҡыуанам. Яратҡан гәзитебеҙҙең әлегә бөтөнләй билдәле булмаған башлап яҙыусыларҙы күреп алып, әҫәрҙәрен баҫып, уларға артабанғы ижад юлдарында фатихаһын биреүе бик тә ҡиммәт.

"Киске Өфө"нө алдырып, яратып уҡыған дуҫтарым да, таныштарым да күп, тинем. Гәзит материалдары буйынса һөйләшеп, фекер алышып торабыҙ. Барыбыҙҙың да уйы бер: "Киске Өфө" халҡыбыҙҙың рухи донъяһын байытыуҙа, бөгөнгөләрҙе "йоҡоһонан" уятыуҙа, телебеҙ байлығын һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә, тарихыбыҙҙың билдәһеҙ биттәрен асып биреүҙә бик ҙур мәҙәни эш башҡара. Шағирыбыҙ һүҙҙәрен үҙгәртеп әйткәндә, йөрәгендә халҡы булғандың "Киске Өфө"нө алдырып уҡымаҫҡа хаҡы юҡ!

**Фирүзә АБДУЛЛИНА, уҡытыусы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһының Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы төбәктең Ҡыҙыл китабына тәҡдим ителгән хайуандар донъяһы объекттарын исемлеккә индереү, шулай уҡ уның теҙмәһенән ҡайһы берәүҙәрҙе сығарыу өсөн тикшереүгә ҡыҙыҡһыныусы кешеләрҙе саҡыра.Ведомствоның матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, әлеге ваҡытта Башҡортостан Республикаһы территорияһында һирәк осраусы һәм юғалыу ҡурҡынысы аҫтында булған хайуандар һәм үҫемлектәр исемлеген - "Хайуандар" томын яңынан баҫыуға әҙерләк бара. Яңы баҫмаға индереү өсөн 114 ҡырағай хайуан төрө, сығарыу өсөн 23 төр тәҡдим ителгән. Мәғлүмәтте ishemgulova.n@bashkortostan.ru электрон адресына йүнәлтергә кәрәк. Белешмә өсөн телефон: (347) 218-04-52.

✓Илдең иң эре хәйриә фондтарының береһе - Русфонд Рәсәйҙең 54 төбәк халҡының изгелек күрһәтеүҙә ҡатнашыу дәрәжәһен баһалап, уның нигеҙендә Рәсәйҙең тәүге шәфҡәтлелек рейтингын әҙерләгән. Башҡортостан унда өсөнсө урынды биләй. Изге эштәр буйынса беренсе урында Дағстан, рейтингтың икенсе баҫҡысында - Һарытау өлкәһе. Шулай уҡ ун лидер иҫәбенә Краснодар крайы, Ырымбур, Түбәнге Новгород, Мурманск, Пенза, Әстерхан өлкәләре һәм Татарстан Республикаһы инә.

✓Картон һәм ҡағыҙ етештереү өсөн ҡорамалдар поставкалауға килешеүҙе "Көньяҡ Урал" компанияһы - Стәрлетамаҡта "Инмаш" технологик паркы резиденты - Ҡытайҙың J.S. Corrugating Machinery Co. Ltd компанияһы менән төҙөгән. Ноябрҙең башында Ҡытайҙа уҙған Башҡортостан Республикаһының бизнес көндәрендә документҡа ҡул ҡуйылған. Технологик парктың мәғлүмәттәре буйынса, яңы етештереү линияһы Стәрлетамаҡта 2009 йылдан алып сығарылған гофротараның үҙ ҡиммәтен дүрт тапҡырға кәметеү мөмкинлеге бирәсәк. Макулатура һәм ағартылған целлюлоза сеймал булып хеҙмәт итәсәк.

✓Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында күҙ табиптарын ҡара ҡылау хирургияһының ультратауыш методикаһына практик яктан уҡытыу өсөн WETLAB заманса уҡытыу лабораторияһы асылды. Был проект ярҙамында офтальмохирургтар ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ҡара ҡылауҙы заманса технологиялар менән дауалай ала.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МАТЕМАТИКАНЫ - ИКЕ КИМӘЛДӘ

**Быйыл мәктәп тамамлаусылар бындай яңылыкҡа ҡыуаныр, моғайын: уларға математика буйынса имтихандың ике варианты тәҡдим ителәсәк.**

Берҙәм дәүләт имтихандарының быйылғы иң мөһим яңылығы - математиканы нигеҙ һәм профиль кимәлдәрҙә тапшырыу мөмкинлеге. Гуманитарийҙарға юғары уҡыу йортона инеү өсөн был предметтан юғары балл туплау мотлаҡ түгел, математиканы көндәлек тормошта нисек ҡулланырға өйрәтеүҙәрен күрһәтә белһәң - шул да етәсәк. БДИның нигеҙ өлөшө мәсьәләләренең мәғәнәһе тап шунда ла инде. Тик шуныһын алдан әйтеп ҡуйыу кәрәк: ике имтиханмы, әллә берәү - профиль кимәлдәме - уныһын тәбәктәр үҙҙәре хәл итәсәк. Был йәһәттән мәғариф етәкселәрен ике имтихан үткәреү кәрәклегенә инандырыуы ата-әсәләр иңенә төшәсәк. Ә ике варианттың да кәрәклеген үткән аҙнала илдең 15 мең мәктәбендә үткәрелгән һынау имтихандары асыҡ күрһәтте.

- "Өслө" билдәһе алыр өсөн егерме мәсьәләнең етәүһен сисергә кәрәк ине. Уҡыусыларҙың 90 проценты ошо бурысҡа өлгәште,- тип һөйләй математиканан БДИ өсөн яуаплы федераль төркөм етәксеһе Иван Ященко. - Балаларҙың яртыһынан күберәге ундан артыҡ мәсьәлә систе, ә бөтөн биремдәрҙә лә һәр дүртенсе уҡыусы ғына атҡарып сыҡты.

Бына ошо 25 процент уҡыусы БДИ-ны профиль кимәлдә тапшырасаҡ та инде. Шулай ҙа ундан артыҡ мәсьәлә сисеүселәрҙең дә математика төп фәндәрҙең береһе булған вузға инеү өсөн яҡшылап әҙерләнергә ваҡыттары бар әле. Шул уҡ ваҡытта нигеҙ имтиханына ла еңелсә ҡараш дөрөҫ булмаҫ ине. Уны һис тә "йомшаҡтар" өсөн тип әйтеп булмай. Унда тормоштан алынған, шулай уҡ зирәклеккә иҫәпләнгән ҡыҙыҡлы мәсьәләләр тупланған, ә буласаҡ "мехмат"сылар өсөн биремдәр юҡ.

Шуныһын да әйтеп китеү кәрәк: имтихан ваҡытында калькулятор менән файҙаланыу тыйыла, ләкин һәр бер партала белешмә материалдар яҙылған махсус ҡағыҙ биттәре ятасаҡ. Унда төрлө формулалар, бөтөн һандарҙың квадраттар таблицаһы кеүек мәғлүмәттәр буласаҡ.

# ИНША ЯҘЫУ ҠАМАСАУЛАМАҪ

**Быйылдан башлап мәктәптә тамамларға йыйынысыларҙы тағы бер "баш ауырыуы" көтә: улрус теленән мотлаҡ инша. Уның буйынса зачет бирмәйенсә, уҡыусы Берҙәм дәүләт имтиханына индерелмәйәсәк.**

Рособрнадзор, ниһайәт, инша яҙыу көнөн дә билдәләне. Ун беренсе класс уҡыусылары быйыл декабрҙең тәүге шаршамбыһы (быйыл ул 3-өнә тап килә) инша яҙасаҡ. Ә ҡабаттан тапшырыу февраль айының тәүге шаршамбыһы мөмкин буласаҡ. Был көндә үткән йылдарҙа мәктәп тамамлаусылар ҙа үҙ теләктәре менән инша яҙа ала. Быйылғы уҡыу йылынан башлап вуздарҙың ҡабул итеү комиссиялары иншаны иҫәпкә аласаҡ (был тәү сиратта гуманитар факультеттарға ҡағыла). Бынан тыш, 2015 йылдың февралендә БДИ рәүешендә тағы ике фәндән һынау тапшырырға мөмкинлек буласаҡ. Уларҙың береһе - былтыр тапшыра алмағандар өсөн рус теленән һәм икенсеһе - географиянан.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АРЗАНҒА ЛА ЙӨРӨП БУЛА



**Баш ҡаланың Электр транспорты муниципаль идаралығы, электр транспортында юл хаҡы күләменең 12 һумдан 15 һумға тиклем күтәрелеүенә бәйле, электрон пластик карталар буйынса иҫәпләшеүселәр өсөн файҙалы тарифтар эшләне. Улар юл хаҡын элеккесә - 12 һум итеп түләйәсәк.**

Шулай уҡ яңы индерелгән тариф пландары юл хаҡын бер ни тиклем кәметеүҙе лә күҙаллай. Мәҫәлән, 20 (200 һум) һәм 30 (285 һум) тапҡыр йөрөүгә айлыҡ абонементтар ҡаралған. Улар буйынса бер яҡҡа юл хаҡы 10 һум һәм 9 һум 50 тин буласаҡ. "Һаҡсыл" тарифы 540 һумға 60 тапҡыр йөрөү мөмкинлеген бирә. Ә студенттар, льготалы категория һәм уҡыусылар өсөн 50 тапҡыр йөрөү мөмкинлеген бирген абонементтар 380 һум, 285 һум, 230 һум торасаҡ. "Актив" тарифы картаһы айына 90 тапҡыр йөрөүҙе күҙаллай һәм 720 һум тора. Был осраҡта юл хаҡы 8 һумға төшәсәк. Студенттар, льготалы категория кешеләре һәм уҡыусылар өсөн 90 тапҡыр юл йөрөү картаһы 630, 470, 375 һум буласаҡ. "Ультра" тарифы иһә 900 һумға барып баҫасаҡ, әммә уның менән айына 120 тапҡыр йөрөргә мөмкин. Был осраҡта бер яҡҡа юл хаҡы 7,5 һумға төшәсәк.

Бөгөн баш ҡалала 170 меңдән ашыу пластик карта ғәмәлдә. Уларҙың хужалары карталарын тулыландырғанда яңы тариф планын һайлай ала. Артабан инде карталар һәм тариф планы менән интернет аша ла идара итеү мөмкин буласаҡ. Электр транспортында юл йөрөү хаҡын үҙгәртеү ваҡыты тураһында өҫтәмә мәғлүмәт биреләсәк.

# БӨЙӨК ДАТАНЫ ҠАРШЫЛАП



**Ҡала хакимиәтендә 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына саралар әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитеты ултырышы уҙҙы.**

Сарала ҡатнашыусылар ветерандарға социаль һәм көнкүреш хеҙмәтләндереүендә ярҙам күрһәтеү, өйҙә һәм махсус учреждениеларҙа тәрбиәләү, һуғышта ҡатнашыусы яңғыҙаҡ ветерандарҙың һәм уларҙың тол ҡалған ҡатындарының йортон техник ремонтлауҙы ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе. Шулай уҡ 1941 - 1945 йылдарҙа тылда эшләүсе ветерандар иҫтәлегенә ҡуйыласаҡ һәйкәл буйынса ла фекер алышынды, һәйкәлдәр, монументтар, обелискылар һәм хәрби ҡәберлектәр урындарын тәрбиәләү һәм төҙөкләндереү, уларҙы паспортлаштырыу мәсьәләләре тикшерелде. Рәсми, мәҙәни һәм башҡа сараларҙы ойоштороуға, мәғлүмәт тәьминатенә ҙур иғтибар бирелде.

ХАҠТАР НИ ХАҠ?

# ФАТИРҘАР ҠЫҘЫҠҺЫНДЫРАМЫ?



**"Эксперт" күсемһеҙ милек агентлыктары селтәре аналитиктары Өфөлә яңы төҙөлөүсе торлаҡ баҙарында хаҡтарҙың түбәнәйеүен теркәгән. Сентябрҙә Өфөнөң яңы төҙөлгән йорттарында квадрат метрҙың уртаса хаҡы 58,9 мең һум тәшкил итһә, ноябрь башына ул 56,1 меңгә тиклем төшкән. Беренсел баҙарҙа хәлде анализлау өсөн 656 фатир һайлап алынған.**

"Эксперт" селтәре етәксеһе Елена Андреева аңлатыуынса, Өфөлә яңы йорттарға ихтыяж һуңғы бер нисә йылда тәүге тапҡыр кәмене, әммә хаҡтарҙың түбәнәйеү күбеһенсә ихтыяждың кәмеүе менән түгел, ә төҙөлөштөң башланғыс стадияһында яңы проекттарҙың барлыҡҡа килеүе һәм төҙөүселәрҙең маркетинг акциялары менән бәйле.

Өфөләге яңы йорттарҙа иң ҡиммәт "квадраттар" - ҡала үҙәгендә: 72,5 мең һум. Артабан, "Эксперт" мәғлүмәттәре буйынса, Йәшел сауҡалыҡ (63,3 мең һум), Инорс (61,2), Октябрь проспекты (60,6), Сипайлово (57), Черниковка (54,5), Дим (51,3), Затон (44,8) килә. Иң күп тәҡдимдәр - Октябрь проспектында (яңы төҙөлөүсе йорттарҙа һатыуға ҡуйылған бөтә фатирҙарҙың 18,9 проценты) һәм ҡала үҙәгендә (18,3).

Ҙур һорау менән күбеһенсә бер бүлмәле фатирҙар файҙалана. Уларҙың хаҡы сентябрҙән 2,5 процентҡа кәмегән. Ике бүлмәле фатирҙар ошо уҡ осорҙа 3 процентҡа, өс бүлмәләр 5 процентҡа арзанайған.

# БАРЫҺЫ ЛА КОНТРОЛДӘМЕ?

**Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты төп тауарҙар төркөмөнә хаҡтар мониторингы үткәреп, уның һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың ауыл хужалығы баҙарында хәл тотороҡло, тигән һығымта яһаны. Ведомство хаҡтарҙың кинәт артыуына тәүшарттар күрмәй һәм уларҙың барлыҡҡа килеүен күҙалламай.**

- Төп сауҙа селтәрҙәре, Башҡортостан сауҙа ассоциацияһы һәм республика етештереүселәре менән конструктив диалог көйгә һалынған. Хаҡтарҙың ҡапыл күтәрелеүе бер кемгә лә отошло түгел. Бөтә яҡтар ҙа хаҡтарҙың тыныс һәм тотороҡло хәле менән ҡыҙыҡһына, - тип иҫәпләй дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Валерий Белов.

Анализлау бөгөнгө хаҡтар артыуының миҙгел факторына нигеҙләнеүен һәм алдағы йылдарҙағы миҙгелле үҙгәрештәргә тулыһынса тап килеүен күрһәткән. Хаҡтар яңы өлгөргән ҡыярға (сентябргә ҡарата 46,14 процентҡа), томатҡа (35,57 процентҡа) һәм татлы бороҫҡа (14,39 процентҡа) үҫкән. Мониторинг мәғлүмәттәренә ярашлы, яңы өлгөргән ҡыярға һәм томатҡа хаҡ былтырғы йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда күпкә түбәнерәк.

Йыл башы менән сағыштырғанда картуф 10,5 процентҡа арзанайған һәм бөгөн килограмы 18-25 һум тора. Уҙған йылдар тәжрибәһенән сығып күҙаллағанда, йыл аҙағына тиклем картуфтың хаҡы 20 процентҡа тиклем артыуы ихтимал. 2010 йылда республика өсөн уңышлы булмаған йылда ла картуф хаҡы был осорға 25 проценттан да юғары күтәрелмәгәйне. Ағымдағы йылда Башҡортостанда картуф уңышы яҡшы ғына.

Хаҡтар спекуляцияһына юл ҡуймау өсөн республика Хөкүмәте ҡарамағында тауар баҙарында тотороҡлоҡ тәьмин итеү, ауыл хужалығы продукцияһына, сеймалға һәм аҙыҡ-түлеккә хаҡтың артыуына юл ҡуймау мәсьәләләрен оператив ҡарау өсөн штаб булдырылған. Штаб составына ҡыҙыҡһынған башҡарма власы органдары, контролдә тотоусы һәм күҙәтеүсе ведомстволар, бизнес вәкилдәре инә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Өфөлә Волга буйы, Урал һәм Коми Республикаһы композиторҙарының XVI Бөтә Рәсәй музыка фестивале үтте. Мегаполис ысын мәғәнәһендә музыка баш ҡалаһына әүерелде. Һигеҙ фестиваль концертында Башҡортостан, Татарстан, Сыуашстан, Мари Иле, Удмуртстан, Мордовия, Коми Республикаһы вәкилдәренең музыкаһы яңғыраны. Фестиваль уҙған быуаттың 80-се йылдарынан алып Рәсәйҙең милли республикаларының баш ҡалаларында йыл һайын уҙғарыла. Быйыл ул бишенсе тапҡыр Өфөгә килде.

✔ Өфөлә сираттағы "Стопнаркотик" акцияһы башлана. Сараны "Стопнаркотик" Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек хәрәкәтенең Өфө бүлексәһе һәм ҡала хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты ойоштора. Акцияны ойоштороусылар ҡала халҡын теге йәки был наркотик матдәләрҙе: "хуш еҫле микстар", "тарта торған ҡатнашмалар", "спайстар" һәм "тоҙҙар", рекламалаусы яҙыуҙарға иғтибар итергә саҡыра. Уларҙың урынлашыуы тураһындағы мәғлүмәтте stop_narko@mail.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк. Хатҡа объекттың фотоһын да беркетергә мөмкин.

✔ Янауыл районынан хроник бөйөр етешмәүсәнлеге менән яфаланған пациенттарға хәҙер йәшәү өсөн мөһим булған гемодиализ процедураһын уҙғарыу өсөн аҙнаһына өс тапҡыр тиҫтәләгән саҡрым араны үтергә кәрәкмәй. Янауыл Үҙәк район дауаханаһында заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған гемодиализ үҙәге асылды. Бында алты аппарат ҡуйылған. Һаулыҡты тотоу өсөн кәрәкле процедураны тәүлегенә 30 пациентҡа тиклем эшләү мөмкин буласаҡ.

✔ БР Мәҙәниәт министрлығы "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ ижады коллективы" тигән маҡтаулы исем булдырҙы. Яңы награда халыҡ художество ижады коллективтарын дәртләндереү, үҫтереү һәм уларға булышлыҡ итеү, республика халыҡтарының мәҙәниәтен һаҡлау һәм рухи берҙәмлекте нығытыу маҡсатында ойошторолған. Исем биреү тураһында үтенес ҡағыҙын Башҡортостан райондары һәм ҡалалары хакимиәттәре тапшыра ала. Исем алыуға үҙешмәкәр художество ижады менән 10 йылдан ашыу шөғөлләнеүсе "халыҡ (өлгөлө) коллективтары" хоҡуҡлы.

ФИНАНС ӘЛИФБАҺЫ

**Ипотекаға фатир алырға тәүәккәлләп, үҙәк банктарҙың береһенә мөрәжәғәт иткәйнек. Банкта урынлашҡан консультация биреүсе компания хеҙмәткәре кредиттың ике төрө барлығы тураһында белдерҙе. Тәүгеһе буйынса - ай һайын түләнә һәм кәмей торған сумма, ә икенсеһе буйынса - кредит срогы буйына ул сумма үҙгәрешһеҙ һаҡлана. Беренсе вариантты һайлаған хәлдә, беҙҙең айлыҡ түләү суммаһы 30 мең һум, ә икенсе осраҡта иһә - 26 мең самаһы булыр ине. Беҙ икенсе вариантты ҡулайлы тип таптыҡ та, ғариза ҡалдырҙыҡ. Күпмелер ваҡыттан һуң банктан ыңғай хәбәр килде. Шулай ҙа ҡыуанысыбыҙ күпкә булмаған икән. Кредит килешеүе төҙөр көн еткәс, кредит белгесе беҙгә тәүге вариант (айлыҡ түләүе 30 меңлек) буйынса ғына кредит бирә алыуҙары тураһында белдерҙе. "Һеҙгә дөрөҫ консультация бирмәгәндәр, бынан тыш, беҙҙең программалар был төр кредитҡа (банкҡа ай һайын бер үк сумма ҡайтарыу мөмкинлеге) көйләнмәгән", - тине. Беҙ тәүге консультация биреүсе хеҙмәткәрҙең беҙгә биргән яҡынса түләүҙәр графигын күрһәткәс һәм кредит алыуҙан баш тартасағыбыҙ тураһында белдергәс кенә банк вәкилдәре беҙҙең өсөн генә иҫкәрмә эшләргә булды... Ошо хәлдән сығып, һорау тыуа: банк системаһында йәшерен "тишектәр" ҙә бармы ни? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу маҡсатында, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор Ҡадир Барый улы МӘҒӘФҮРОВ менән башлаған һөйләшеүҙе ("Киске Өфө", №36) дауам итмәксебеҙ.**

# ИПОТЕКАЛА...

## йәшерен "тишектәр" бармы?



- Бөтөн йәшерен "тишектәр" - кешенең белеме булыуы һөҙөмтәһе генә. Шуға, әлеге осраҡты "йәшерен юл" тип атау дөрөҫлөккә тап килеп етмәй, минеңсә. Эшҡыуарҙар ҙа бит, закондарҙы, положениеларҙы яҡшы белә икән, сығымдарын кәметеү юлын таба. Белемең бар икән - рәхим ит...

Кредит консультанты менән һөйләшеп алыуығыҙ бик урынлы, дөрөҫ булған. Һеҙ алған кредит "аннуитет түләү" тип атала. Был төр кредитты ҡайҙан уйлап тапҡандар? Уның мәғәнәһе, әтнәкәһе ниҙә? Был һорауҙарға яуап табыр алдынан "дифференциацион", йәғни, айырмалы түләүҙе ҡарап үтәйек.

Үткән һөйләшеүҙә әйткәнемсә, процент кредиттың ҡалдығынан иҫәпләп сығарыла. Дифференциацион түләү (йәғни, ай һайын түләнә торған сумманың йылдан-йыл кәмеүе) шарты менән бер йылға 120 меңлек кредит алдыҡ икән, ти. Тәүге айҙа процентты 120 мең һумлыҡ, икенсе айҙа - 110 мең һумлыҡ төп бурысҡа ("основной долг") ҡарап түләйәсәкбеҙ. Һуңғы айҙа иһә - 10 меңгә генә процент түләү талап ителә. Беренсе айҙа, әлбиттә, тулы суммаға түләгәс, процент та күберәк була. Кәмей-кәмей барып, һуңғы айында процент бәләкәй генә ҡала. Әйткәнемсә, был - дифференциацион түләү, тип атала. Әйтәйек, 20 йылға 1 миллион һумлыҡ кредит алғанһың, ти. 20 йылда - 240 ай. Миллионды 240-ҡа бүлдең дә, килеп сыҡкан һан буйынса төп бурыстың тигеҙ өлөшөн түләйһең. Шул тигеҙ өлөшкә процент ҡушыла. Ул процент ай һайын кәмей бара. Бынан тыш, банк "аннуитет түләү"ҙе лә юҡтан ғына уйлап сығармаған. Кредиттың был төрөндә айлыҡ түләү ай һайын бер суммала ҡала килә. Нимә иҫәбенә шулай килеп сыға һуң? Яуабы анһат ҡына. Аннуитет түләүҙә төп бурыс башта - әҙерәк, аҙаҡ нығыраҡ кәмей. Аннуитет түләүҙе икенсе төрлө эшләп булмай. Бындай түләү банкҡа ниməһе менән уңайлы? Ай һайын бер үк суммала хаҡ түләтеү банкҡа дифференциацион түләүгә ҡарағанда күберәк процент алып килә, сөнки, ҡабатлап әйтәм, төп бурыс тәүҙә аҙыраҡ кәмей. Был осраҡта икенсе айҙа алдағы дифференциациялы түләү миҫалындағы һымаҡ, процентты 110 меңгә түгел, ә күберәккә түләйһең. Был да тәүгеөс айҙа төп бурысты ҡайтармаҫҡа мөмкин, тигән система кеүек килеп сыға.

**Тимәк, аннуитетлы түләүҙе һайлап, беҙ яңылышҡанбыҙмы?**

- Баштан уҡ әйтеп ҡуяйым - һеҙ дөп-дөрөҫ эшләгәнһегеҙ. Шуға, хеҙмәткәрҙәр һеҙгә был төр кредитты бирергә ашҡынып бармаған. Күрәһең, кәңәшләшеп алғандар ҙа, 20 йылға аннуитетлы түләү ярамай, тигәндәрҙер. Бында әтнәкә 20 йылда. 1-2, 3 йылға алынған аннуитетлы кредит банкҡа бик уңайлы. Ул яҡшы итеп аҡса эшләп ҡала. Әммә 20 йылда был төр кредит банк өсөн уңайһыҙ. Әлеге лә баяғы, инфляция ғәләмәте. 20 йылда инфляцияның ниндәй кимәлгә етерен бер кем дә белмәй. Ә һин һаман да бер үк сумма түләйһең. Шуға, оҙайлы ваҡытҡа кредит алғанда аннуитетлы түләү отошлораҡ. Айлыҡ түләүең бөгөн 26 мең булһа, 20 йылдан һуң да шул уҡ ҡаласаҡ. Шулай ҙа, ҡулыңа алғас та, килешеүҙе бик ентекләп уҡырға кәрәк. Уның аҙағында элек ваҡ ҡына хәрефле яҙыу була торғайны. Хәҙер ундай яҙыу тыйылған. Әммә, барыбер, документты ентекләп уҡырға кәрәк. Кеше уҡып тормаһын, тип, күп һәм ҡатмарлы итеп яҙалар. Әйтәйек, "берәй хәл килеп сыҡһа, банк бер яҡлы рәүештә был килешеүҙе үҙгәртә ала" тигән яҙыу ҙа булыуы мөмкин. Ундай килешеүгә ҡул ҡуйырға ярамай, әлбиттә. 1998 йылғы кеүек көрсөк була ҡалһа, банк процентын 25-30 процентҡа күсереүе мөмкин. Ә хеҙмәткәрҙең эш хаҡы - үҙгәрешһеҙ ҡалыуы көн кеүек асыҡ. Ундай хәлдәрҙән һаҡланыр өсөн килешеүҙе бик яҡшы итеп өйрәнеү кәрәк.

Һығымта шулай: 1-2 йылға кредит алғанда - айырмалы, йәғни, дифференциацион түләү, ә 20-30 йылға ипотека алғанда - аннуитет түләү отошлораҡ.

**Иҙел РӘХИМОВ әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ЭШ БУЙЫНСА ШЫЛТЫРАТҠАНДА...

**Курьер булып эшләйем. Миңә йыш ҡына кеҫә телефонынан эш буйынса шылтыратырға тура килә. Эш биреүсе был шылтыратыуҙар өсөн түләргә тейешме?**

- Шәхси телефондан эш буйынса шылтыратыуҙар эш биреүсенең рөхсәте менән башҡарылған осраҡта ғына компенсациялана. Түләүҙәрҙең күләме һәм тәртибе эш биреүсе һәм хеҙмәткәр араһындағы килешеүҙә билдәләнә.

Ҡайһы бер ойошмаларҙа эш буйынса шылтыратҡан өсөн аҡсалата компенсация ғына түгел, ә шәхси телефондың амортизацияһы өсөн дә түләү ҡаралған. Был шулай уҡ яҙма килешеүҙә билдәләнгән була. Әгәр ҙә эш биреүсе бындай шылтыратыуҙарға үҙ рөхсәтен бирмәгән булһа, унан һөйләшеүҙәр өсөн аҡса талап итә алмайһығыҙ. Шуға күрә барыһын да алдан һөйләшеп, яҙма килешеүҙә билдәләп ҡуйыу аңлашылмаусанлыҡҡа юл ҡуймаҫ.

## БАҠСАМДА ЭЛЕКТР БАҒАНАҺЫ

**Ауылда шәхси милкемдә булған ер биләмәһендә электр сымдары үткән 2 бағана тора. Иң ҡыҙығы шунда, өйөмә электр уты ул бағаналарҙан түгел, ә ҡойманан ситтә урынлашҡан бағаналарҙан килә. Биләмәмдәге бағаналар баҡса эштәре менән булған ваҡытта нык ҡамасаулай. Уларҙы икенсе урынға күсереүҙе талап итергә хоҡуғым бармы һәм был осраҡта кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Тәү сиратта урындағы хакимиәттән бағаналарҙың кем милкендә булыуын белергә кәрәк. Ғәҙәттә, бындай бағаналар район (ҡала) электр станцияһы (компанияһы) милкендә була. Ошолай булған осраҡта бағаналарҙы икенсе урынға күсереүҙәрен талап итеп, электр станцияһына яҙма ғариза бирегеҙ. Әгәр ҙә улар быны бер ай эсендә эшләмәһә, ер биләмәгеҙ менән ҡулланыуҙа ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөүҙе талап итеп, судҡа ғариза яҙығыҙ. Әйткәндәй, электр бағаналарын күсереү өсөн сығымдарҙы уларҙың милексеһе ҡаплай (РФ Граждандар кодексының 304, 305-се статьялары).

## ӨЙҘӘ ТОРМАҒАНДА...

**Мин бер тәүлек эшләйем һәм өс тәүлек ял итәм. Айына 7 көн тирәһе өйҙә булмай сығам. Минең осраҡта коммуналь түләүҙәрҙе яңынан иҫәпләтергә мөмкинме?**

- Коммуналь түләүҙәрҙе яңынан иҫәпләтеү хоҡуғына 5 көн рәттән өйҙә булмаусы ҡулланыусы ғына эйә. Был хаҡта Күп фатирлы йорттағы фатирҙар һәм торлаҡ йорттар милекселәренә һәм ҡулланыусыларына коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү Ҡағиҙәһенең 86-сы пунктында әйтелә (Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 2011-се йылдың 6-сы майында раҫланған 354-се һанлы Ҡарар). Шул уҡ ваҡытта яңынан иҫәпләү иҫәпләгес (счетчик) ҡуйылмаған хеҙмәттәр өсөн генә башҡарыла.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Пародонтоз

❖ 15 грамм бәйғәмбәр тырнағын (календула) 100 мл ҡайнар һыуҙа 1 сәғәт төнәткәс, һөҙөргә һәм ауыҙҙы сайҡарға. Ауыҙ эсендә бер аҙ тоторға ла ярай.

### Осҡолоҡ

Ҡайһы саҡта бер туҡтауһыҙ тамаҡ саҡырып (икота) йонсота. Бәғзе берәү нығыҙалай бының менән. Бынан ҡотолоу өсөн бәйғәмбәр тырнағы, меңъяпраҡ, аҡ сәскә, үгәй инә үләне япрағы, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, ҡанлы үләндәрен (чистотел) яртышар ҡалаҡ алырға ла, 1 литр ҡайнаған һыуға һалып, 10-15 минут быу ваннаһында, һуңынан 10-12 сәғәт ҡараңғыла (термоста булһа, бигерәк шәп) торорға. Ошо төнәтмәне 10-15 көн буйы ашар алдынан сирек стакан күләмендә көнөнә 3 мәртәбә эсергә. Бик килешә.

### Күҙҙәр өсөн салат

❖ Ҡабығынан таҙартылған көнбағышты һары төҫкә ингәнсе табала ҡыҙҙырырыға һәм ҡырылған кишер һалып болғарға, ҡаймаҡ йәки майонез менән тәмләтергә.

### Аллергия

❖ 2-3 ҡалаҡ ваҡланған һуҡыр кесерткәнде (пустырник) 0,5 литр ҡайнаған һыуға һалып, термоста 1-2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм аллергик таптар, тимерәү, фурункулез булғанда ҡан таҙартыу сараһы булараҡ, көнөнә 4-5 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

### Тирләү

❖ Кем нык тирләй - эндокрин, нервылар системаһы, бөйөр сирҙәре тураһында һөйләй. Туберкулез башланыуының билдәһе булыуы ла ихтимал.

❖ Помидорҙың йомшаҡ өлөшөн марля аша һығып, ҡултыҡ аҫтына, ус төптәренә һәм табандарға һөртөргә лә, шул килеш йоҡларға.

❖ Ҡултыҡ аҫтын яҡшылап йыуғас, июль айында йыйылған ҡайын япраҡтарын йәбештерп ҡуйырға.

❖ Аш һеркәһе һалынған йылымыс ваннa инергә лә була.

❖ 50 грамм икмәк ҡайырыһын 1 литр һыуҙа ярты сәғәт ҡайнатырға һәм төнәтмәне йылы һыу тултырылған һауытҡа һалырға, ярты сәғәттән һуң ванналағы һыуға ҡушып, йыуынырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Сократ: "Бер нәмәгә ҡарамай өйләнегеҙ... Һәйбәт кәләш эләкһә - уңырһығыҙ, насары эләкһә -философ булып китерһегеҙ", тигән сағында мыжыҡлығы менән танылған үҙенең ҡатыны Ксантиппаға күҙ ташлап алған...



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЙЫЛҠЫ МАЛЫ...
## йолаларыбыҙҙа

**Донъя халыҡтары йолаларында ат байрамы тип йөрөтөлгән сара йыш осрай. Унда ҡорбанға йылҡы малы килтерелә, уның тиреһе һәм башы ботаҡтарға эленеп ҡуйыла, ә ҡорбан итен йыйылған халыҡ барыһы ла ауыҙ итергә тейеш була.**

Башҡорт халҡының көнкүрешендә лә был байрамдың эҙҙәре һаҡлана. Иң тәүҙә был турала һарайға, умарталар торған баҡсаға йылҡы малының баш һөйәген элеп ҡуйыу күренеше һөйләй. Ваҡыты-ваҡыты менән был баш һөйәген майлап тороу иһә малды насар күҙҙән, ауырыуҙарҙан һаҡлау, ҡот килтереү өсөн эшләнгән. Бөгөн дә малдың башын кәртә-ҡураһына элеп ҡуйыусылар был йоланы малдың һанын артыуына юрауҙарын белдерә.

Туй йолаларының бер өлөшө - туйлыҡ йолаһында ла ат ҡулланыла. Кейәүҙең ата-әсәһе алып килгән атты туйҙың икенсе көнөндә һуйғандар. Һуйыу мәшәҡәттәре менән хужалар булышҡан, әммә унан алда был атты улар ҡоҙаларынан "һатып алған". Аттың эсәге менән ҡоҙаларҙы "туҡмау", ҡоҙа ҡороҡлау ҙа ошо йоланан тороп ҡалған, күрәһең. Был аттың итен барыһы ла ашап ҡарарға тейеш була, һәр кем үҙ дәрәжәһенә ҡарап, иттең билдәле бер өлөшөн ашаған. Кәләш был йолала ҡатнашмай, юғиһә, уға малдың ҡарғышы төшә, тип иҫәпләгәндәр. Ҡунаҡтар ҡайтып киткәс, ерҙән аттың ҡанын йыйып, кеше аяғы баҫмай торған урынға күмгәндәр, ә һөйәген һыуға ташлағандар. Мал тотем булып иҫәпләнгән осорҙа бындай йолаларҙың үткәрелеүенә аптырарға ярамай. Мәҫәлән, атты ҡоҙалар үҙҙәре түгел, хужалар һуйыуы ат алдында ғәфү үтенеү, уның ҡарғышын үҙ нәҫеленән ебәреү өсөн эшләнә. Кәләштең итте ашарға хоҡуғы юҡ, сөнки әле ул иренең ғаиләһенә инмәгән.

Тотем булып иҫәпләнгән малдың итен күмәкләп ашау күренеше ҡарта ашы йолаһында ла күҙәтелә. Ҡарта - ул малдың йыуан эсәге, туйҙың икенсе көнөнә йәш-еленсәкте һәм йәш килендәрҙе ҡунаҡҡа саҡырып, уларға малдың эсәген ашатҡандар. Унда килеүселәр бүләк итеп тәңкәләр, муйынсаҡтар, йөҙөктәр алып килгән.

"Ҡара юрға" бейеүендә лә ат байрамының эҙҙәре һаҡлана. "Ҡара юрға" эпосында барған ваҡиғаларҙы һүрәтләп бейегән был тамаша ҙур йыйындарҙа башҡарылған. Бөгөн дә башҡорт бейеүҙәрендә "ат сабыу", "ат йүгереге", "юрға йөрөшө" кеүек тыпырлауҙар йәшәй.

Боронғо башҡорттар атты изгеләштергән, уға табынған, сөнки ул нәҫелде дауам итеүгә, ғаиләненең ныҡлығын булдырыуға ярҙам итә, тигән ҡараш булған. Әгәр ҙә кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ төшөндә ат күрһә, ул тиҙҙән кейәүгә сыға, тип юрағандар. Йорт тирәһендә аттың дағаһы төшөп ҡалһа, ғаилә ныҡ булһын, тип теләп, уны тупһаға, ишеккә ҡағып ҡуялар. Был ышаныу малдың үрсемен арттырыу маҡсатында ла ҡулланылған. Балаға уҙа алмаған ҡатындар күлдәгенең итәгенә һоло һалып, бейәне ашатһа, бала табасаҡ, тигәндәр. Ғәйнә башҡорттарында ауырлы ҡатын аттың дуғаһын аша атлап сыҡмаған, юғиһә, бала тыуҙырыуы ауыр була, тип иҫәпләгәндәр. Әгәр ҙә ваҡыты етеп тә, бала тыуырға ашыҡмаһа, ауырлы ҡатын итәгенә һоло йәки икмәк һалып, атты ашатырға тейеш булған.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ КӨСӨ...
## уның көсһөҙлөгөндә

(Башы 3-сө биттә).

### Үҙ-үҙенә ҡул һелтәгәндәрме?

Бөгөнгө йәмғиәт рухи көрсөк кисерә, быға күберәк эскелек, баҙар иҡтисадының кире яҡтары тәьҫир итәлер. Күптән түгел зауыҡһыҙ буянған (бәлки, күңеле лә шулайҙыр) иҫерек йәш ҡыҙҙы күрҙем. Ул бысраҡ кейем кейгән, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан егет менән ҡултыҡлашып алған. Ҡыҙ үҙ-үҙенә бөтөнләй ҡул һелтәгәнгә оҡшаған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай күренештәр менән йыш осраша башланыҡ. Бөгөнгө көндә бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙың хәмер эсеүе хафаға һала, был хатта ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Медицина хеҙмәткәре булараҡ, ҡатын-ҡыҙ алкоголизмын дауалап булмай, тип раҫлай алам. Ҡатын-ҡыҙҙың эсеүе үтә ҡурҡыныс күренеш. Ҡатын-ҡыҙға ҡарата хөрмәт, мөхәббәт бөтһә, ул ябай тауарға әйләнһә, рухи бөлөү ошо була инде. Интернет, йәки ниндәй генә "һары" матбуғат баҫмаһын алма, унда ҡатын-ҡыҙҙарҙың һатылыу урындары хаҡында мәғлүмәткә юлығаһың. Ҡатын-ҡыҙҙың бындай һатлыҡ затҡа әйләнеүендә беҙ, ир-егеттәр ҙә ғәйепле бит, йәмәғәт. Ләкин ҡатын-ҡыҙҙың үҙенең дә ғәйебе ҙур.

"Битһеҙ ҡатын-ҡыҙ" тигән рәсем бар. Бында матур кәүҙә һүрәтләнгән, ә кәүҙәнең бите юҡ. Бит урынына... бушлыҡ. Ҡатын-ҡыҙ үткән менән киләсәкте бәйләүсе зат. Тимәк, беҙ төпһөҙ upҡынға тәгәрәүсе йәмғиәт.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә бөйөк, саф, абруйлы, дәрәжәле ҡатын-ҡыҙҙар күп түгел. Улар, күрәһең, элекке заманда тороп ҡалғандыр. Бөгөн үҙенә иш таба алмаған ир-егеттәр Пушкиндың Татьянаһына, Толстойҙың Наташа Ростоваһына, Тургеневтың Асяһына ғашиҡ була. Элек ҡатын-ҡыҙ өсөн алышып, дуэль ойошторһалар, бөгөн, киреһенсә, ҡыҙҙар ихтыярһыҙ егеттәрҙе яҡлай. Донъя үҙгәрә...

Тормошомда күп төрлө ҡатын-ҡыҙҙарҙы күрергә тура килде: көрәк менән асфальт һалыусы, бокс буйынса ярыштарҙа һәм ҡағиҙәһеҙ һуғышыуҙа ҡатнашыусы, хоккей уйнаусы, ауыр штанга күтәреүсе... Ләкин минең наҙлы, мәрхәмәтле, хатта көсһөҙ, ярҙамға мохтаж ҡатын-ҡыҙҙы күргем килә. Ҡатын-ҡыҙ бит барыбер ҙә көсһөҙлөгө менән көслө.

Ҡатын-ҡыҙ үҙенең тәбиғәте менән илаһи зат, мөхәббәт сығанағы. Дантены "Божественная комедия", Петрарканы "Книга песен" әҫәрҙәрен яҙырға ҡатын-ҡыҙға ҡарата мөхәббәт илһамландырған. Уҡыусыларын өйрәтеп ултырған Сократ: "Бер нәмәгә ҡарамай өйләнегеҙ... Һәйбәт кәләш эләкһә - уңырһығыҙ, насары эләкһә - философ булып китерһегеҙ", тигән сағында мыжыҡлығы менән танылған үҙенең ҡатыны Ксантиппаға күҙ ташлап алған...

Боронғо грек яҙыусыһы Диоген көндөҙ шәм яндырып, "Кеше эҙләйем!" тип йөрөгән. Мин дә һәр саҡ ҡатын-ҡыҙҙа ҡатын-ҡыҙҙы эҙләнем. Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙы! Һағыштарымды баҫырға ярҙам итсе, донъя ваҡлыҡтарынан арынып, яҡтылыҡҡа ос һәм гүзәл, илаһи, ҡабатланмаҫ затҡа әйлән!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ
## Егерме икенсе һабаҡ: "Хәтер нығытырға өйрәтәйек"




**Хәйбулла районында йәшәгән халыҡ йыраусыһы Мөхәмәтйән ағай Ҡаҙаҡбаев ағай менән осрашҡан һайын уның хәтер ныҡлығына һоҡланам.**

Һуңғы осрашыуымда ла ошо хәтер һандығының сайпылмаған да, бүҫкәрмәгән дә икәнен күреп, ҡыуандым.

- Ағай, хәтер яҡтылығы, зиһен ныҡлығы ҡайҙан килә? - тип һораным унан. Ағай был һорауға һәр тарафтан бик ҡиммәтле фекер менән яуап бирҙе.

- Атайым да, әсәйем дә, олатайҙарым да, бигерәк тә Ейәнғол олатайым, тотош нәҫелебеҙ менән быуындан-быуынға уҡымышлы булған. Утыҙ етенсе йылдарҙа донъялар боларып киткәс, өлкәндәрҙең ҡайғырышҡанына шаһитмын. Боронғо ғилем юҡҡа сыҡты, йырҙарыбыҙ ҙа, ҡобайыр-мөнәжәттәребеҙ ҙә кәрәкһеҙгә әйләнер инде, боронғо китаптарыбыҙ яндырыла... - тип, хәсрәтләнеп-көйөп һөйләшкәндәрен ишетә йөрөнөм. Ә шулай ҙа хәтерҙе бит юҡҡа сығарып та, яндырып та булмай. Көн һайын ни булһа ла ятлап, зиһенгә бикләй барайым, улар белгән байлыҡты мөмкин тиклем отоп алайым, тип уйланым да, ни булһа ла отоп ала ла ятлап, ҡат-ҡат ҡабатлап йөрөй башланым. Шундай күнегеүҙәр арҡаһында мейе күҙәнәктәрен тут баҫманы, зиһен яҡтырҙы. Әле бер нәмәне лә онотмағанмын...

Тимәк, зиһенгә бәләкәй саҡтан күнекмәләр эшләргә кәрәк икән! Әлбиттә, кеше кешегә оҡшамай, төрлөһөнөң һәләте төрлөсә була, әммә нисек кенә булмаһын, мейе күҙәнәктәренә күнекмә яһау бер кемгә лә ҡамасауламай.

Халыҡ ғилеменә күҙ ташлап, бындай күнекмәләрҙең нисек яһалыуын байҡап ҡарайыҡ.

Сабыйҙа тыуған саҡта уҡ тойоу хәтере көслө була. Шуның өсөн кендек инәйҙәре, сабыйҙы ҡулға алыу менән, атаһының кейеп йөрөгән күлдәген бөркәп һалыр булған. Әсәһен былай ҙа тояСаҡ, атаһын да яҡын күрһен өсөн башҡарылған был йола. Сабый атаһы кейеп йөрөгән күлдәктең еҫен зиһенендә ҡалдыра. Сабый тәүҙә кешене танып түгел, тойоп таный. Ҡайһы берәүҙәргә ул мыжый, илай, ҡайһыларына ихлас йылмайып, һикереп тора.

Артабан сабыйҙың ошо тойоп-таныу һәләте үҫтерелә бара. Ул үҙ кейемен танып таба, башҡаларҙыҡын да таный. Бер үк урынға ултыра. Әйберҙәрен, уйынсыҡтарын бер тәртиптә теҙеп ултырта. Уйынсыҡтың ишен таба. Тәбиғәткә сыҡҡан саҡта сәскә йәки япраҡтарҙың ишен таба башлай...

Бала өсөн хәтер нығытыусы уйындар үткәреү бик файҙалы. Мәҫәлән, уҙышыуҙар. Һәр кем йүгерерҙән алда тәғәйен урынына баҫырға тейеш. Баҫаһы урынға тәғәйен бер төрлө уйынсыҡ һалып ҡуйырға тейеш. Бына шундай иҫтә ҡалдыра торған еңел генә йөкләмәләрҙән башларға кәрәк зиһен нығытыу күнекмәләрен.

Баланың йәше ҙурая килә, күнегеүҙәр ҙә ҡатмарлаша. Бармаҡ уйындары, ҡыҫҡа ғына әүрәткестәр ятлау, телдән иҫәп-хисап ғәмәлдәре башҡарыу, йыр-таҡмаҡтар, нәҫел шәжәрәһен ятҡа бикләү, көн, ай исемдәрен иҫтә ҡалдырыу... Шиғыр-ҡобайырҙарға күскәнгә тиклем бала зиһененә һалып ҡалдырыр ижад өлгөләре бик күп. Бала үҫә килә ҡыҫҡа ғына әкиәттәр һөйләтеү ыңғай һөҙөмтәләр бирә.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабы бына шулай аҡрынлап яҙыла. Мәрйәм апай Бураҡаеваның яҙғандарына башҡа педагогтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

СӘЙӘХӘТНАМӘ

**"Киске Өфө" гәзитенең 2012 йылғы 50-51-се һандарында тикшеренеүсе-этнолог Зәкирйән Әминевтың "Иранда башҡорттар бармы?" тигән мәҡәләһе сыҡҡайны. Автор унда үҙенең алыҫ фарсы дәүләтенең картаһында Башакерд тип аталған тау һыртына юлығыуына һәм карталағы мәғлүмәттәрҙән сығып, Башакерд тауының беҙҙең халыҡҡа берәй мөнәсәбәте юҡмы икән, тигән фараздар менән яңы мәғлүммәттәр эҙләй башлауы тураһында яҙғайны. Эҙләнеүҙәре уны "башгард", ("баджгирд", "Бәшкәрт") тигән халыҡҡа килтереп сығара. Был халыҡ хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт туплау маҡсатында әле күптән түгел Башҡортостан Республикаһынан бер төркөм ғалим Иранға юл тотто.**



# БӘШКӘРТ ИЛЕНДӘ

Экспедицияла этнологтар Зәкирйән Әминев, Юлиә Әбсәләмова, Гөлнәзирә Кинйәбаева, археолог Вячеслав Котов, бынан бер нисә йыл элек Теһран университетында уҡып ҡайтҡан фарсы теле белгесе, Бөрйән ҡыҙы Зәлифә Әбүбәкирова (Ҡолбирҙина) һәм йәш ғалим Азат Әбүбәкиров ҡатнашты. Башҡортостан ғалимдарына Ирандың Бендер-Аббас ҡалаһынан археолог Сәмәйә Поодат менән бығаса тиклем Башҡортостанда булып киткән Әмин Салари ихлас ярҙам күрһәтте. Әйткәндәй, Экспедицияның уңышлы эшләүе Зәлифәнең Ирандың башҡалаһы Теһранда белем алып, фарсы телен яҡшы белеүе һәм дә археолог Сәмәйә Поодаттың, Әмин Салариның ихлас ярҙамдары менән нык бәйле. Шул арҡала ярайһы уҡ күп материалдар йыйырға, халыҡ менән осрашырға, аралашырға мөмкинлек тыуҙы.

Ике аҙналыҡ сәфәрҙең маҡсаты - Ирандың көньяҡ-көнсығышында Бәшкәрт тигән тау теҙмәләрендә көн күргән бәшкәрт халҡы менән танышыу һәм, уларҙың ҡасан да булһа Урал башҡорттары менән берәй бәйләнеше булғанмы, юҡмы, тигән һорауға яуап табырға тырышыу ине. Тарихта бер үк, йәки яҡын яңғырашлы атама йөрөткән халыҡтар күп түгел. Башҡорттар менән бәшкәрттәр араһындағы оҡшашлыҡ шул һирәк осраҡтарҙың береһе. Шуға күрә лә был халыҡтар араһында бәйләнештәр булыу-булмауы, була ҡалһа, был бәйләнештәрҙең ҡайһы осорға һәм ниндәй территорияларға ҡайтып ҡалыуын өйрәнергә кәрәк.

Иң алдан шуны әйтеп китергә кәрәк - бәшкәрт халҡы бөтөнләй тиерлек өйрәнелмәгән. Был халыҡҡа арналған бер нисә генә фәнни хеҙмәт билдәле. Шулар араһында инглиз ғалимдары Е.А.Флоер, И. Гершевич, Моргенстьерненың һәм Норвегия ғалимы (хәҙер Гарвард университетында эшләүсе) П.О.Скйарвёның тикшеренеүҙәрен һәм ошо хеҙмәттәргә таянып, рус ғалимдары И.М.Оранский менән В.В.Мошкало тигән ғалимдарҙың хеҙмәттәрен әйтеп китергә була. Хатта Ирандың үҙендә лә уларҙы яңыраҡ ғына өйрәнә башлағандар һәм әлегә ниндәйҙер фәнни уңыштар менән маҡтана алмайҙар. Шулай булғас, башҡорт ғалимдарының бәшкәрт халҡы йәшәгән ерҙәргә барып, ҙур булмаған, әммә ҡыҙыҡлы материал туплауы Рәсәй этнология фәне өсөн дә оло ваҡиға булып тора, тип әйтергә лә хаҡыбыҙ барҙыр.

Бәшкәрттәр Фарсы ҡултығына параллель рәүештә һуҙылған Бәшкәрт тауҙары һырттарында, Ирандың иң ҙур диңгеҙ порты булған Бендер-Аббас ҡалаһынан йыраҡ булмаған урында көн күрә. Бәшкәрт телендә һөйләшеүселәрҙең һаны әлегә аныҡ ҡына асыҡланмаған. Бынан егерме йыл элек уларҙың һаны 75 мең тирәһе булғанлығы билдәле.

Бәшкәрт теле боронғо замандарҙа уҡ юҡҡа сыҡҡан пехлеви, авеста телдәре менән бер дәүерҙә формалашҡан тел һанала. Тик аҙаҡҡы ике тел күптән юҡ булһа, бәшкәрттәр үҙ телдәрендә әле булһа аралаша. Был телдең марзигал һәм мөлкигал диалекттары бар. "Гал" фарсы телендә һөйләш тигәнде аңлата. Бик боронғо, хатта фарсыларҙың теленән дә боронғораҡ, үҙаллы тел булыуына ҡарамаҫтан, бәшкәрт телен фарсылар үҙ теленең бер диалекты тип кенә ҡарай. Әммә фарсы теллеләргә бәшкәрт теле бигүк аңлашылмай. Бәшкәрт теленең бик боронғо айырым тел икәнлеген беҙгә ярҙам итеп йөрөгән археолог Сәмәйә Поодат ханым да билдәләп үтте. Әлеге ваҡытта бәшкәрттәрҙең күп өлөшө фарсы телен яҡшы белә, шулай уҡ мәктәптәрҙә уҡытыу ҙа фарсы телендә алып барыла. Уларға күрше булып ҙур ғына һанлы Рәсәй фәнендә белуджи тип аталған, әммә үҙҙәрен "балучи" тип атаған халыҡ йәшәй. Әйтергә кәрәк, тикшеренеүселәр билдәләүенсә, балучилар араһында ла "башгирд" тип аталған этнографик төркөм бар, етмәһә, башгирдтар совет осоронда Совет Төркмәнстанында ла йәшәгән. Әммә, үкенескә ҡаршы, башҡорт ғалимдарына был мәғлүмәттәр әллә билдәле булмаған, әллә белеп тә ҡыҙыҡһынмағандар - был халыҡ хаҡында бер ниндәй материалдар ҙа юҡ.

Экспедиция һөҙөмтәләре буйынса йомғаҡ яһарға, Урал башҡорттары менән Иран бәшкәрттәре араһындағы бәйләнештәр тураһында әлегә аныҡ ҡына әйтеп булмай. Йыйылған материалдарҙы ентекләп өйрәнергә һәм яңы материалдар туплау, уларҙы анализлау зарур. Шулай ҙа ниндәйҙер уртаҡлыҡтар тураһында әле үк һүҙ йөрөтөргә мөмкиндер.

Беҙ тәүҙә Иран дәүләтенең башҡалаһы Теһранда туҡтаныҡ. Унда беҙҙе Зәлифә үҙе уҡып бөткән Теһран университетының уҡытыусылары менән таныштырҙы. Иран ғалимдарының да башҡорт халҡы менән яҡындан танышырға, беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итергә ниәттәре ҙур. Осрашып һөйләшеүҙәр барышында артабан бергәләшеп эшләп, киләсәктә Башҡортостан һәм Иран халыҡтарының тормош-көнкүрешенә бәйле булған күргәҙмәләр ойоштороп, халыҡтарыбыҙҙы таныштырырға кәрәк, тигән фекергә килдек.

Теһрандан беҙ бәшкәрт тауҙарына юл тоттоҡ. Бәшкәрт ере, үҙҙәре әйтмешләй, бығаса сит-яттар бигүк үтеп инмәгән ер. Теһранда бәшкәрттәр йәшәгән ерҙәрҙе, Һормозган провинцияһының иң артта ҡалған, йәшәү өсөн уңайлы шарттары булмаған ере, тип оҙатып ҡалғайнылар. Шуға күрә, ауыр шарттарҙа эшләргә тура килер, тип, хәлебеҙҙән килгәнсе әҙерләнеп, үҙебеҙ менән күп итеп ашарға-эсергә алып барҙыҡ.

Юлда китеп барабыҙ. Тау араларында ауылдар бар тип уйламаҫһың да. Бөтә бәшкәрт ауылдары ла тау араларындағы үҙәндәрҙә йәшенешеп ултырған кеүектәр. 1956 йылғы экспедицияһындағы материалдарҙа күренекле ғалим Илья Гиршевич та бәшкәрт ауылдарын шулай һүрәтләй. Төнгө сәғәт дүрттәр тирәһендә генә таулы бәшкәрттәр еренә аяҡ баҫтыҡ. Төбәп барған Гәүһүрән ҡалаһында беҙҙе Нәдир исемле ир-егет бик тә ихлас ҡаршы алып, идара мейманханаһында урынлаштырҙы. Йоҡо туйҙырып, икенсе көнө урамға сыҡҡас, яҡшы асфальт юлдарҙы, тирмәләре янында таштан һалынған өйҙәрҙе һәм тырышып матур итеп йәшәп ятҡан бәшкәрттәрҙе күреп ҡыуандыҡ. Үрҙә әйтеп киткәнсә, бик аҙ өйрәнелгән, әммә бик тә ихлас, ябай, алсаҡ һәм шул ваҡытта үҙ баһаларын белгән, ғорур халыҡ булып сыҡты беҙҙең яңы таныштарыбыҙ. Ярҙам итергә һәр саҡ әҙер торалар. Экспедициябыҙҙың беренсе көнөнән үк машина һәм ҡунып йөрөү өсөн өй мәсьәләһе менән ихлас ярҙам иттеләр.

Беҙ килеп урынлашҡан ҡаланың боронғо исеме Йәһүрән булған. Ислам революцияһына тиклем Анһуран булһа, һуңынан Гәүһүрән тип үҙгәртелгән. Беҙҙең яңы таныштарыбыҙ был атаманың мәғәнәһен, Йәһүрән боронғо бәшкәрт телендә "ярты көн" була, тип аңлаттылар. Сөнки башҡа ауылдарҙан Гәүһүрәнгә килеп еткәнсе ярты көн уҙыр булған. Гәүһүрән эргәһенән генә Ашҡун йылғаһы аға. Гәүһүрәндән тыш, Паҡуһе Сефид, Гоурауи һәм Йағдан, Сардашт ауылдарында булдыҡ. Һәр ерҙә беҙҙе яҡты сырай, асыҡ күңел менән ҡаршы алдылар. Гоурауи ауылында күстәнәскә бер мискә яңы ғына йыйылған финиктар ҙа бирҙеләр.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**философия фәндәре кандидаты, БР Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының рухи донъя бүлеге мөдире.**
**Зәлифә ӘБҮБӘКИРОВА,**
**Рәсәй Фәндәр академияһының ғилми хеҙмәткәре, фарсы теле буйынса белгес.**

**(Дауамы бар).**



БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Ҡәбер кеше оҙонлоғонда, көнсығыштан көнбайыш йүнәлешендә ҡаҙыла. Уның көньяҡ ҡабырғаһында 70 сантиметр бейеклегендә һәм киңлегендә махсус уйым эшләнә. Мәйетте шунда арҡаһына, йөҙөн көньяҡҡа, йәғни Мәккә тарафына ҡаратып һалалар һәм уйымды ҡыялатып ләхет таҡтаһы менән ябалар. Был уға туранан-тура тупраҡ төшмәһен өсөн эшләнелә. Ҡәбер махсус ағас көрәк, мандра ярҙамында ҡаҙыла һәм тупраҡ иҫке сүмес менән алып ташланыла. Барлыҡ был ҡорамалдар зыяратта ҡалдырыла. Күмгән ваҡытта мулла аят уҡый һәм ҡәбергә бер ус тупраҡ ташлай. Уның артынан башҡалар ҙа берәр ус тупраҡ ташлап сыға. Ҡәбер күмелгәс, барыһы ла уны тирәләй ултырыша һәм мулла тағы ла Ҡөрьән аяты уҡый, мәрхүмдең туғандарының береһе хәйер тарата, һуңынан барыһы ла өйҙәренә таралыша.

Ҡәбер өйөмө таштар менән уратыла, баш осона ҙур таш ултыртыла. Ҡайһы берҙә ташҡа мәрхүмдең исеме, тыуыу һәм үлеү ваҡыты, Ҡөрьәндән өҙөк яҙыла. Ҡәберҙәр, нигеҙҙә, ялан ерҙәрендә таштан уратыла, урманға бай яҡтарҙа ғәҙәттә ете-һигеҙ бүрәнәнән бура ултырталар. Зыяраттар ғәҙәттә ауылға яҡын, урман араһында, ағастарҙы ҡырҡыу тыйылған һәм һәр ваҡыт таҙа тотолған урында урынлаша. Башҡорттар унда калуштарын сисеп инә. Бигерәк тә башҡорттар әүлиәләр күмелгән ҡәберҙәрҙе һаҡлай. Бик йыш ундай урындар ағас үҫеп бөткән боронғо ҡурған булып ҡалған. Ғәйнә ырыуы башҡорттары миңә намаҙға саҡырып аҙан әйткәндә боронғо ҡәберҙән дә шундай аҙан тауышы килеүен һөйләне. Бындай ҡәберҙәр эргәһенән үткәндә башҡорттар шым ғына, аят уҡып үтә. Улар эргәһендә үҫкән ағастарҙы ҡырҡырға ярамай. Ә инде кемдер батырланып китеп ҡырҡа ҡалһа йәки ҡәберҙе ихтирам итмәһә, уларға ҡәһәр төшә, тиҙәр. Кемделер фалиж һуға, икенсеһе аҡылдан яҙа, өсөнсөһөнөң бөтөн ырыуы ҡорой. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары риүәйәт буйынса 40-60 аршинлыҡ бәһлеүән кешеләр ерләнгән ҡәберҙәргә лә шундай уҡ ихтирам менән ҡараған.

Мәйет сыҡҡан өйҙә ике тәүлек ризыҡ әҙерләмәйҙәр. Өсөнсө көнгә мәрхүмдең өсөн уҡыталар һәм йыйылыусыларҙы бишбармаҡ менән һыйлап, күп итеп хәйер тараталар. Мәрхүмдең милкенең бер өлөшөн муллаға бирәләр, ул оҙаҡ ваҡыт дауамында уның өсөн аят уҡырға тейеш була. П. С. Назаровтың мәғлүмәте буйынса, башҡорттарҙа иҫкә алыу табынында махсус ике төр ашамлыҡ була: йәймә һәм бутҡа. Өсөнән һуң етеһе һәм ҡырҡ көнө уҡытыла.

Ғаиләнең патриархаль ҡоролошона бәйле, мираҫ хаҡында ла бер-нисә һүҙ әйтергә кәрәк. Ғаиләлә барлыҡ балалар ҙа тиң хоҡуҡлы, әммә барлыҡ милеккә ғәҙәттә кесе малай хужа була, сөнки ололары атай кеше иҫән саҡта уҡ башҡа сығарыла. Ҡыҙҙар әсәй милкенең мираҫсыһы була. Әгәр ул кейәүгә сыҡҡанда атаһы вафат булған булһа, уның бирнәһе хаҡында ҡыҙ йәшәгән ағаһы йәки бабаһы хәстәрлек күрә һәм ул уҡ ҡалым ала. Әгәр ғаиләнең улы булмаһа, улар кейәүҙе үҙҙәренә алған осраҡтар ҙа булған. Бындай кейәү, әгәр уның балалары булһа, бөтөн милектең хужаһына әүерелә. Ҡатыны үлгән осраҡта, ул ҡайны өйөнә икенсе кәләш килтерергә лә хоҡуҡлы. Әгәр ҡатыны түлһеҙ булып, уларҙың балалары булмаһа, кейәү, икенсегә өйләнә ала, әммә был йорттан китергә мәжбүр була.

# Аҡсаның ә малтабарҙың

**Совет власы йылдарында был синыф вәкилдәре лә, синыфтың атамаһы ла хәтерҙән юйылды йә кире мәғәнәлә ҡулланылды. Буржуа синифы тураһында һүҙебеҙ. Һүҙлектәрҙә аңлатылыуынса, буржуа - ул капиталистик йәмғиәттә етештереү сараларының хужаһы һәм ялланып эшләүселәрҙе файҙаланыу юлы менән килгән килемгә йәшәүсе. Европа тарихсылары һәм сәйәсмәндәре буржуаны төрлө тарихи осорҙарҙа ниндәйҙер ыңғай үҙгәрештәргә нигеҙ һалыусылар, алдыңғы ҡатлам тип тә баһалай. Бөгөнгә телгә әйләндергәндә, буржуа - ул шул уҡ эшҡыуар, малтабар, зыялылар ҡатламы була түгелме? Бармы бөгөн беҙҙә ошондай зыялылар? Кем ул заман буржуаһы? Ошолар тураһында һөйләшергә беҙ "Коммунальник" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры, БР-ҙың атҡаҙанған төҙөүсеһе Дамир АЛЛАЯРОВты һәм Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты доценты Нурислам ҠАЛМАНТАЕВты саҡырҙыҡ.**

**Буржуа, малтабар, эшҡыуарҙар араһында айырма бармы, әллә улар бер синыф кешеләреме? Кемдер ауыл магазиндарында һыра һатып, аҡса эшләй, кемдер етештереү менән була. Ошо ике төркөмдәгеләр психологияһы араһында айырма нимәлә?**

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Магазин асып, унда башҡалар етештергәнде һатып ҡына байып китеп булмай, унан алған килем ғаиләнде ҡарауға ғына етә. Эште ниндәй кимәлдә ойоштора алыу һәр кешенең донъяға ҡарашынан, психологияһынан тора, әлбиттә. Бай булыу кешегә ҡандан килә, затында була. Бөтәһе лә генерал булмаған кеүек, бөтәһе лә эшҡыуар, миллионер ҙа була алмай. Ә малтабарлыҡтың төп үҙенсәлеге - ул кеше бер ҡасан да туҡтап ҡалмай, туҡтай ҙа алмай. Баҫҡыстан өҫкә менә бара, менә бара. Яңы үрҙәргә ынтылмаһаң, артыңдан килеүселәр һине тапап үтеп китә, йә үҙең ҡолап төшәһең. Шуға күрә, булмышың бай, етеш йәшәгән кешенеке түгел икән - байып китеүең икеле. Беҙҙең халыҡ эшҡыуарҙы ла, малтабарҙы ла аҡса артынан ҡыуыусылар тип кенә ҡарай. "Аҡса һаман етмәйме ни әле һиңә?" тигән һораүҙы миңә лә биргәндәре бар. Сөнки улар һинең был кимәлгә еткәс, аҡса табыу өсөн эшләмәүеңде аңламай. Эшҡыуарлыҡ, малтабарлыҡ тора-бара күңелеңә ятҡан шөғөлгә әйләнә, шунан инде ошо өлкәлә яңы баҫҡысҡа күтәрелеү, яңы мөмкинлектәр асыу өсөн тырышаһың. Үҙеңде генә ҡайғыртмайың, ҡул аҫтыңда эшләгән эшселәрҙе лә уйлайһың, уларҙы ла арыу эш хаҡы менән тәьмин итергә теләйһең. Кибет асып, спиртлы эсемлектәр һатып, бер көнлөк байлыҡ менән йәшәүселәр бар - уның мәғәнәһен күрмәйем. Кәсепселәр менән эшҡыуарҙар араһында ғына түгел, эшҡыуарҙар менән буржуа араһында ла айырма ҙур. Мин 23 йыл буйы көнө-төнө тир түгеп эшләйем, әммә буржуа кимәленәсә үҫеп етә алмайым әле.

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** Ул кимәлгә барып етеү өсөн, йәғни буржуа тип һаналыр өсөн, һеҙҙеңсә, аҡсағыҙ күпме булырға тейеш һуң?

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Бәлки, минең фекерҙе уҡып, кемдер көләр, шулай ҙа минең күҙаллауым буйынса, буржуа синыфына ҡараған кешенең кәм тигәндә 100 миллион доллар аҡсаһы булырға тейеш. Сөнки 10-20 миллион доллар хәҙер һәр чиновниктың кеҫәһендә бар.

**Хәҙер "буржуа" тигән ҡатлам бөтөнләй юҡтыр беҙҙең йәмғиәттә?**

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Тарих биттәренән билдәле булыуынса, халыҡты алға әтәреүсе көс - милли буржуазия. Совет власы урынлашҡас, шул ҡатламды юҡҡа сығарып, был хаҡта онотторҙолар. Беҙ, олатайҙарҙың ыштандары ла булмаған, яңы власть күҙебеҙҙе асты, тип ҡупырайып йәшәнек. СССР тарҡалғас, ул системаны ла яманлап, хәҙер бөтәбеҙ ҙә эшҡыуар булып китәбеҙ, байыйбыҙ, тигеҙләшәбеҙ, тип лаф орҙоҡ. Тик улай килеп сыҡманы. Милли сәйәсәт тә совет заманындағы кеүек түгел хәҙер, йәғни тиндәр араһында тиң булып йәшәү тигәнде лә онотторҙолар. Элек был мәсьәләне барыбер ҙә партия системаһы көйләй торғайны. Мәҫәлән, беренсе секретарь урыҫ икән, икенсеһе - башҡорт, өсөнсөһө мотлаҡ бүтән милләт вәкиле. Уҡырға ингәндә лә тигеҙлек һаҡланды. Театр, концерттарҙа ике телдә бер тигеҙ һөйләнеләр, китаптар ҙа русса, башҡортса баҫыла торғайны. Береһе лә үҙен кәм күрмәһен өсөн эшләнде былар, ләкин хәҙер шул ыңғай тәжрибә юҡҡа сыҡты. Шуға бөгөн беҙгә үҙебеҙҙең милләттән сыҡҡан буржуалар, байҙар кәрәк. Аҡсаның милләте юҡ, тиһәләр ҙә, эшҡыуарҙың, байҙың милләте бар. Башҡорт йәмғиәтендә эшҡыуарлыҡты үҫтереү, ошо өлкәлә кәрәкле структуралар булдырыуҙың мөһимлеген аңлатырға кәрәк йәштәргә.

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** Буржуазияға килгәндә, беҙҙең милли буржуазия булған: Тасим Маметов, Туҡтамыш Ишбулатов, Мансур һәм Арыҫлан Ҡырыҫовтар, Исмәғил Тасимов. Әйткәндәй, Исмәғил Тасимов Елизавета Петровнаның Уложенная Комиссияһына Пермь мәғдәнселәренең наказын төҙөүселәрҙең береһе. Башҡорттарҙы мәғдән сығарыу эшенә уҡытыу ниәтендә 1771 йылда Берг-коллегияға тау училищеһы астырыу тураһында үтенес яҙыусы ла ул. Француз тарихсыһы Роже Порталь үҙенең "Рәсәй өлкәләренең тарихын, тарихнамәһен, сығанаҡтарын өйрәнеү буйынса тикшеренеүҙәр" китабында: "Башҡорт байҙары булған, халыҡ уларҙы шул тиклем ихтирам иткән", - тип яҙа. Бай ағай эш бирә, ашата. Байҙар булғас, үҙебеҙҙең һин дә мин йәмғиәтебеҙ булған. Ихтилал башлыҡтары ла - бөтәһе лә байҙар, был аңлашыла: үҙен дә ҡарай алмаған фәҡир кеше артынан кем эйәрһен?

Бөгөн эшҡыуарҙар сәйәсәткә ҡыҫылырға теләмәй, тиһәгеҙ ҙә, элек улай булмаған. Ерҙәрен Твердышев тартып алғас, уны судлашып та еңә алмағас, Юлай Аҙналин улы Салауат менән Пугачевҡа ҡушылып китәләр. Һеҙ әйтмешләй, власть менән килешә алмағас, урау юлын табалар. Пугачевтың ысын Петр III булмауын белә тороп та, үҙ ерегеҙҙә иркен йәшәгеҙ, тигәне өсөн генә эйәрәләр уға.

Эйе, байҙарға булған ихтирамды Совет власы заманында бөтөрҙөләр. Улар насар кеше, халыҡты талайҙар, муллалар ҙа алама кешеләр, алдаҡсылар, ярлылар иҫәбенә йәшәйҙәр, тигән фекер мейегә һеңдерелде. Ә беҙ үҫкәндә ауылдағы клубыбыҙ ҙа, мәктәп тә, китапханалар ҙа байҙарҙың йорттарында урынлашҡайны, ике ҡатлы өйҙәр күп ине. XXI быуат башында башҡорт йәмғиәте байып, аяҡҡа баҫҡан, ныҡ алға киткән булған. Тик халыҡтың байлығын тартып алдылар ҙа, хәтерен дә юйҙылар. Һеҙ ярлы, ҡулығыҙҙан эш килмәгән халыҡ, тип тигеҙләп ҡуйҙылар.

Бөгөн беҙ байҙарҙы күтәрергә, балаларҙы бай булырға өйрәтергә тейешбеҙ. Уларҙы мәктәп эскәмйәһенән алып уҡытырға кәрәк быға. Кешегә күп аҡса бирҙең дә, ти, әммә ихтыяр көсө, характеры булмаһа, уның байып китеүе икеле. Ул аҡсаны тота белергә, капиталын нимәгә һалырға мөмкин икәнен аңларға, башлы һәм уҫал да булырға тейеш. Бындай сифаттарға күптәр эйә була алмай, шуға йәмғиәттә байҙар билдәле бер процентты ғына тәшкил итә. Бөгөн беҙгә үҙебеҙҙең байҙарға юл бирергә кәрәк, ә улар халыҡ ихтыяжы менән дә йәшәргә өйрәнергә тейеш. Шунһыҙ булмай. Дамир дөрөҫ әйтә, тиңдәр араһында тиң булып йәшәү тураһында бары тик үҙебеҙ генә ҡайғырта алабыҙ хәҙер. Мәҫәлән, Өфөләге таныштар дәүләт ҡарамағындағы балалар баҡсаларына сират күп булғас, шәхси башҡорт балалар баҡсаһы эҙләп, таба алмауҙары тураһында һөйләгәйне. Баҡтиһәң, башҡа милләттәрҙең шәхси балалар баҡсалары бар, ә башҡорттарҙыҡы юҡ икән. Байҙарыбыҙ булһа, исмаһам, баш ҡалабыҙҙа сабыйҙарыбыҙҙы башҡортса тәрбиәләү мөмкинлеге тыуҙырылған балалар баҡсаһы асыр ине...

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Әлеге көндә республикалала урман хужалығы, ерҙе хосусилаштырыу, нефть мәсьәләләре буйынса бәхәс бара. Урал арьяғы башҡорттарының йәшәү рәүеше шул урман хужалығына туранан-тура бәйләнгән, әммә беҙҙең аранан сыҡҡан урман сәнәғәтселәре ҡайҙа? Спортсылар, ғалимдар, эшҡыуарҙар, малтабарҙар кәрәк икән милләткә, уларҙы мәктәптән тәрбиәләй башлау фарыз. Юғары уҡыу йорттарында менеджмент, эшҡыуарлыҡ, бизнес ойоштороу буйынса эш хаҡынан эш хаҡына тиклем йәшәгән уҡытыусылар уҡыта. Теорияны өйрәтергә лә булалыр, әлбиттә, әммә аҡсаны дөрөҫ тотонорға китап уҡып ҡына өйрәнеп булмай, уңышлы эшҡыуарҙарҙы саҡырып, дәрестәр үткәргәндә, бәлки, файҙалыраҡ булыр ине.

Әлбиттә, эшҡыуарҙарға ла еңел түгел. Чиновниктар эшҡыуарҙар менән саҡ ҡына ла кәңәшләшмәйсә, төрлө ҡанундар сығарып, шарттар ҡуйырға әҙер генә тора. Бөтә закондар ҙа насар тимәйем, әммә улар сығып тора, эшҡыуарҙар уның урау юлдарын табып тора. Хөкүмәт менән эшҡыуарҙар араһында бәйләнеш юҡ, уртаҡ һүҙ табыуы ҡыйын. Шуға күрә, фекер алышыу, эшҡыуарлыҡты үҫтереү өсөн кәңәш ҡорҙары кәрәк ине. Эшҡыуарҙарға власть кәрәкмәй, беҙҙең менән иҫәпләшеүҙәре генә кәрәк. Бөгөн үҙ бизнесын башларға теләүселәргә дәүләт ҡаҙнаһынан 150 мең һум субсидия бүленә. Мин, комиссия ағзаһы булараҡ, ғариза биреүселәр менән күрешәм, һөйләшәм. Теплицала йәшелсә-емеш үҫтерергә, мал тоторға, хужалыҡтарын киңәйтергә иҫәп тотоп килеүселәр күп. Хәҙерге заманда 150 мең һум аҡсамы инде ул?

Бөгөн төрлө статистик мәғлүмәттәрҙе ҡараһаҡ, башҡорттар бөтөн күрһәткестәр буйынса ла урталыҡтан аҫта тора. Мәҫәлән, хәрби дәрәжәләр буйынса башҡорттарҙың дәрәжәһе капитандан түбәнерәк, арабыҙҙа адмиралдар, генералдар юҡ. Илдең, донъяның иң бай кешеләре исемлегенә лә башҡорттар инмәгән, беҙҙең Абрамович, Ходорковский кеүек байҙарыбыҙ юҡ. Сәйәси, иҡтисади, социаль, юридик мәсьәләләрҙе лә кемдең аҡсаһы күберәк, шул үҙ мәнфәғәтендә хәл иткән көндә, беҙҙең шундай бай кешеләребеҙ булмауы үкенесле. Башҡорттарҙың уртаса күрһәткестәрҙән аҫта тороп ҡалыуын милләттәштәрҙең төрмәгә нисек эләгеүе лә асыҡ сағылдыра. Улар әсәһенең пенсияһын талай, ҡаҙ йә һарыҡ урлай. Миллиондар, миллиардтар урлап, төрмәгә ултырыусылар юҡ, сөнки быға ла баш кәрәк.

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** "Бай булам!" тигән ынтылыш беҙҙең менталитетта ла юҡ шул. Башҡорт тигеҙлекте ятраҡан халыҡ, динебеҙ ҙә шулай. Юҡҡа ғына Ислам динен социализм дине тип атамайҙар. Зәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә: "Мосолман илдәренең Европанан артта ҡалыуы диндән килә икән", - тип яҙа. Ризаитдин Фәхретдинов та беҙҙең халыҡтың тәҡдир көтөп, маңлайына яҙылғанды үҙгәртеп булмауға һылтанып йәшәүен билдәләй. Хоҙай Тәғәлә шулай ҡушҡан икән, уны үҙгәртеүҙән ни файҙа? Алла бабай бирһә бирә, бирмәһә - бирмәй. Тәҡдиргә ышаныу ҡул ҡаушырып ултырыуҙы аңлатмай: "Ҡулыңдан килгәнсә тырышлыҡ күрһәткәндән һуң ғына Аллаһы Тәғәлә ярҙамына өмөтләнергә кәрәк. Кешеләрҙең ерҙәге йәшәйеше, уларҙың тормошо һәм алға китеше, үҫеше тырышлыҡҡа һәм хеҙмәткә нигеҙләнгән", - тигән Ризаитдин Фәхретдинов.

**Эшҡыуарлыҡ башҡорттоң асылына тап килмәй, тигәнде әленән-әле ҡабатларға ятрабыҙ инде ул. Ысынлап та, эшҡыуарлыҡ менән беҙҙең ихласлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ сифаттарыбыҙ бер-береһе менән яраша алмай һымаҡ түгелме?**



***Бөгөн беҙ байҙарҙы күтәрергә, балаларҙы бай булырға өйрәтергә тейешбеҙ. Уларҙы мәктәп эскәмйәһенән алып уҡытырға кәрәк быға. Кешегә күп аҡса бирҙең дә, ти, әммә ихтыяр көсө, характеры булмаһа, уның байып китеүе икеле. Ул аҡсаны тота белергә, капиталын нимәгә һалырға мөмкин икәнен аңларға, башлы һәм уҫал да булырға тейеш. Бындай сифаттарға күптәр эйә була алмай, шуға йәмғиәттә байҙар билдәле бер процентты ғына тәшкил итә. Бөгөн беҙгә үҙебеҙҙең байҙарға юл бирергә кәрәк, ә улар халыҡ ихтыяжы менән дә йәшәргә өйрәнергә тейеш. Шунһыҙ булмай. Дамир дөрөҫ әйтә, тиңдәр араһында тиң булып йәшәү тураһында бары тик үҙебеҙ генә ҡайғырта алабыҙ хәҙер.***

***✓ Йөҙәрләгән йылдар буйына мейегә һеңдерелгән шул сифатты үҙгәртеүе лә еңел түгел. Йәһүдтәр кеүек, тәүәкәлләп, власҡа ынтылырға, ҡулынан эш килерҙәй кешеләребеҙгә юл ҡуйырға, бер-беребеҙҙе күтәрмәләп өйрәнергә кәрәк беҙгә.***

# Милләте юҡ, милләте бар

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Башҡорт халҡының яҡшы ла, насар ҙа бер сифаты бар - беҙ бигерәк ҡунаҡсыл халыҡ. Бигерәк тә ауыл халҡы ҡыҙыҡ: балаларына ашатмаһа, ашатмай, әммә өйөнә килгән ҡунаҡҡа иң ҡәҙерле, иң затлы ризыҡтарын да сығара. Ҡунаҡтар алдында бейеп, уралып йөрөйбөҙ. Хәләл тапҡаныбыҙҙы бушҡа таратырға, бушҡа хеҙмәт күрһәтергә әҙер торабыҙ. Хәҙерге көндә "буштың атаһы үлгән", бөтә нәмә өсөн дә түләргә кәрәк. Мин сит илдәргә күп йөрөйөм. Немецтарҙы ғына миҫалға алғанда ла, улар һине йылмайып, матур итеп ҡаршы алып, тамағыңды туйҙырһалар ҙа, аҙаҡтан бар уңайлыҡтар өсөн дә түләтәләр. Япондар ҙа шул тиклем ихлас йылмайып, матур һөйләп, башҡаларға яҡшы мөғәмәлә күрһәтә белгән халыҡ, әммә улар ошо яҡшы мөғәмәләне һата белә, шуға улар байҙар. Бөтә ерҙә лә хәҙер шулай. Башҡорттар, бәлки, шул ҡунаҡсыллығы менән бүтән халыҡтарҙан айырылып та торалыр, әммә... Урыҫтарҙың бик тапҡыр бер мәҡәле бар: "Яҡшылыҡ йоҙроҡло булырға тейеш".

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** Башҡорт халҡының иң төп сифаты - яҡшылыҡ. Лев Толстой "Кешегә күпме ер кәрәк?" тигән хикәйәһенда башҡорттоң ошо сифаты тураһында бәйән итә. Рус крәҫтиәне Пахом, ерҙәрен бушлай таратыуҙарын ишетеп, башҡорттар янына килә. Ыснлап та, күпме ер кәрәк, шул тиклем алырға була, тик бер генә шарт ҡуйыла: ҡояш байығансы кире ауылға әйләнеп килергә тейешһең. Пахом күберәк ер эләктерергә теләп, атлап түгел, йүгереп китә. Ҡояш байыуға ауыл яғына ыңғайлай - башҡорттар быны ауыл осона сығып, ашыҡтырып ҡыҫҡырып тора, ти. Пахом ауылға инә лә, хәле бөтөп йығыла, шул ятыуынан тормай. Баҡтиһәң, кешегә ер күп кәрәкмәй икән. Лев Толстойҙың үҙ философияһы: ул ике ҡарашты ҡаршы ҡуя - байлыҡ артынан ҡыуған ҡомһоҙ Пахом үлеп ҡалды, киң күңелле башҡорттар рәхәтләнеп иркенлектә, тәбиғәт ҡосағында йәшәүен дауам итә.

Ҡунаҡсыллыҡ, яҡшылыҡ, алсаҡлыҡ, байлыҡ туплау тураһындағы бәхәсте беҙ уйлап тапмағанбыҙ, ул һәр ваҡыт буласаҡ. Уйлап ҡараһаң, һеҙ ҙә дөрөҫ һөйләйһегеҙ, беҙ асыҡ-ярыҡ булыу менәнме ни, эргәләге кешеләр улай уҡ ябай түгел шул. Улар бик әрһеҙ, һинең һуңғы телем икмәгеңде лә тартып алырға әҙер тора, ә беҙ яҡшы күренергә теләп, улар алдында бейеүҙе дауам итәбеҙ.

**▸ Йәмғиәттә бөтәһе лә буржуа була алмай, тип әйттегеҙ бая. Әлбиттә, характерың булмаһа, уҡып ҡына аҡса эшләргә өйрәнеп булмай. Эшҡыуар, малтабар булыр өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк һуң?**

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Эшҡыуарлыҡты үҫтереү, башҡортто аҡса эшләргә өйрәтеү тураһында уйлай башлаһам, йән көйөп, ҡулдар төшөп китә. Беҙҙең егеттәрҙе эшҡыуарлыҡҡа тартыу бик еңелдән түгел. Был йәһәттән башҡаларҙан өлгө алырға кәрәк тә бит. Яҙғыһын бер ауыл йыйылышына барҙыҡ, халыҡ, эш юҡ, тип зарланып йөрөй, әммә береһе лә көтөүсе булырға риза түгел. Хәҙер былар әлеге лә баяғы тажиктарҙы көтөүсе итеп ялламаҡсы итә. Ә бит тажиктар ҙа, үзбәктәр ҙә эсмәй, уларҙың балалары күп була, бер 10-15 йылдан ошонан ер алып, донъя ҡороп, төпләнеп китһәләр, уларға көтөүсе булып башҡорттар үҙҙәре ялланып йөрөйәсәк. Кеше, исмаһам, әҙерәк уйланһа, фәһем алһа ине ошо халыҡтарға ҡарап.

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** В.И. Ленин "Капитализм үҫеше" тигән китабында Пермь башҡорттары миҫалында статистик мәғлүмәттәр килтерә. "Кисәге бай башҡорттар бөгөн урыҫтарға көтөүсе булып эш һорап бара, ниндәй ирония, байҙар меҫкенлеккә төштө", тип яҙа ул. Ошондай хәл беҙҙең менән бөгөн дә ҡабатланмаһын өсөн, бер аҙ алға ҡарап эш итергә кәрәк. Үзбәктәрҙе, тажиктарҙы саҡырырбыҙ, ә улар бит бик көслө, хәйләкәр халыҡ. Һиңә бер нәмә һөйләп тора, икенсе төрлө уйлап тора улар. Әҙ генә көс йыйып алһалар, ауылыңа килеп, һиңә күрһәтмәләр бирә башларға ла күп һорамаҫтар.

Эшҡыуарҙар, малтабарҙар һуңғы ваҡытта хөкүмәт ҡарамағындағы ойошмаларға "Беҙ һеҙҙең тамаҡты туйҙырабыҙ", тип, өҫтән ҡарай башланы. Тимәк, эшҡыуарҙар үҙенең урынын тоя, үҙандары формалаша. Шулай ҙа киләсәктә ваҡ буржуазия менән хөкүмәт араһындағы мөнәсәбәт нисек булыр икән, тип тә уйланыла...

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Ленин: "Һәр бер ашнаҡсы дәүләт менән идара итә белергә тейеш", - тиһә лә, мин икенсе фекергә яҡыныраҡ торам: "Ярлыларҙы власҡа яҡын ебәрергә ярамай", - тигән Черчилль. Элек дәүләт менән идара итеүселәр һәр ваҡыт бай кешеләр араһынан сыҡҡан, сөнки уларҙың аҡсаһы аҡса эшләй. Власҡа кеше үҙенә етерлек мөлкәт туплағас ынтыла башлай. Ә өҫтә ултырған түрәләргә ҡулға өйрәнгән кешеләр кәрәк, һине эргәләрендә йөрөтәләр икән, уларҙың һүҙен һөйләргә тейеш булаһың. Шуның арҡаһында бөгөн Рәсәйҙә юғары вазифалы чиновниктар һәм түбәнерәк вазифалағылар араһында ҡаршылыҡтар күп, өҫтәгеһе аҫтағыны теләгән тиклем талай. Йәштәрҙе шулайтып баҫып торғас, беҙҙә кадрҙар, депутаттар ротацияһы юҡ. Бәлки, бөгөн Рәсәйҙе тарҡатыуҙы көҫәп, һәр яҡлап яҫҡынған көстәр күп булған осорҙа ил менән идара итеү өсөн ҡаты власть кәрәктер ҙә. Сәбәптәре ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, власть кешеләре эшҡыуарҙарҙы ла һанға һуғып өйрәнергә тейеш барыбер. Ә әлегә беҙгә иң мөһиме - милли патриотик буржуазия кәрәк. Тағы берҙе әйтәм, был осраҡта Кавказ халыҡтарынан өлгө алайыҡ, улар араһынан донъяның иң бай кешеләре исемлегенә инеүселәр күп.

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** Беҙ ул исемлектә юҡ шул, берәй ҡасан булырыбыҙға ла шикләнәм. Сөнки беҙ байҙарҙы күрә алмайбыҙ бит. Берәү байыһа, бөтә ауыл шул кеше тураһында яманлап һөйләргә, уңайы сыҡҡан һайын уға ҡаршы һүҙ әйтергә, йүнле кеше булмауын билдәләргә, бер насар яғын табып, нисек булһа ла юҡҡа сығарырға тырыша. Беҙ ул кешене тиҙерәк төрмәгә ябып ҡуйырға теләйбеҙ. Ҡабатлап әйтәм, беҙ тигеҙлекте яратҡан халыҡ, бөтәбеҙ ҙә бер тигеҙ - фәҡир йөрөргә тейешбеҙ. Йөҙәрләгән йылдар буйына мейегә һеңдерелгән шул сифатты үҙгәртеүе лә еңел түгел. Йәһүдтәр кеүек, тәүәкәлләп, власҡа ынтылырға, ҡулынан эш килерҙәй кешеләребеҙгә юл ҡуйырға, бер-беребеҙҙе күтәрмәләп өйрәнергә кәрәк беҙгә.



***Эшҡыуарлыҡты үҫтереү, башҡортто аҡса эшләргә өйрәтеү тураһында уйлай башлаһам, йән көйөп, ҡулдар төшөп китә. Беҙҙең егеттәрҙе эшҡыуарлыҡҡа тартыу бик еңелдән түгел. Был йәһәттән башҡаларҙан өлгө алырға кәрәк тә бит. Яҙғыһын бер ауыл йыйылышына барҙыҡ, халыҡ, эш юҡ, тип зарланып йөрөй, әммә береһе лә көтөүсе булырға риза түгел. Хәҙер былар әлеге лә баяғы тажиктарҙы көтөүсе итеп ялламаҡсы итә. Ә бит тажиктар ҙа, үзбәктәр ҙә эсмәй, уларҙың балалары күп була, бер 10-15 йылдан ошонан ер алып, донъя ҡороп, төпләнеп китһәләр, уларға көтөүсе булып башҡорттар үҙҙәре ялланып йөрөйәсәк. Кеше, исмаһам, әҙерәк уйланһа, фәһем алһа ине ошо халыҡтарға ҡарап.***

**Д. АЛЛАЯРОВ:** 1990 йылдарҙа әле эш башлап ҡына торған саҡта Магнитогорск ҡалаһы рэкетирҙары ҙур ҡурҡыу һала торғайны. Уларға ҡаршы бер ниндәй сара күреп тә, милицияға мөрәжәғәт итеп тә ғәҙеллек табып булмай ине. Ҡала баҙарына һөт продукцияһы, емеш-еләк алып барып һатыусыларҙың биҙрәләрен осора тибеп, хаҡ түләтеп йөрөүселәре лә булды. Бөгөн улай асыҡтан-асыҡ талаусылар юҡ, әммә эшҡыуарҙар административ ресурстарҙан яфалана хәҙер.

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** Шуның өсөн үҙендең дә, милләттең дә абруйын күтәреүҙе хәстәрләргә кәрәк. Беҙ әле башҡорттарҙың рухлы, көслө, ҡөҙрәтле халыҡ булыуы тураһында тарих биттәренән генә уҡып беләбеҙ. П.И. Рычков, И.И. Лепёхиндар ошондай мәғлүмәттәр яҙып ҡалдыра: иң фәҡир башҡорттоң 50 баш йылҡы малы, байҙарҙың 5 мең йылҡыһы бар. Тимәк, беҙ завод хужаһы булып байымайбыҙ, капиталыбыҙ мал менән үлсәнә. "Малтабар" һүҙенең килеп сығышы, бәлки, ошоға бәйлелер ҙә әле. Ерҙәр күп, малдар иркен йөрөй, үрсей - хөрриәт! Бөгөн ерҙәребеҙ ҙә кәмене, мал да юҡҡа сыҡты, хәлебеҙ ҙә бөттө. Аттан төшөп, атлап йөрөй башлағайныҡ, күтәрелеп кенә йәшәп китә алмайбыҙ.

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Япондар әйтмешләй, беҙгә тарихыбыҙҙы иҫебеҙҙә тоторға, әммә бөгөнгө көн менән йәшәргә кәрәк. Замана лидерҙары - эшҡыуарҙар, бизнесмендар араһынан сыҡҡан кешеләр. Улар ҡылыс күтәреп, халыҡты яуға әйҙәмәй, эште яҡшы ойоштора белеүҙәре менән алда бара. Бөгөнгө көндә күп ерҙәрҙе ҡулдан ысҡындырҙыҡ инде, бигерәк тә Урал аръяғы территорияһына ҡараған биләмәләр халыҡҡа бүтән эләкмәйәсәк. Шулай ҙа, тарих ҡабатлана, тиҙәр бит әле, ерҙе хосусилаштырыу тағы бер ҡат булыр, тип уйлайым. Шул моментты ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, законға ярашлы рәүештә, иғлан ителгән торг аша ерҙәребеҙҙе һатып алып өлгөрөргә кәрәк беҙҙең башҡорт эшҡыуарҙарына.

**Н. ҠАЛМАНТАЕВ:** Мин үткән заманды маҡтап, кире ҡайтарырға теләгәндән әйтмәйем. Бөгөн беҙ тарихыбыҙҙы юғалтҡан өсөн шундай хәлдәбеҙ, элек ғәскәребеҙ һәм яугир тигән данлыбыҙ булғас, беҙҙең менән иҫәпләшкәндәр. Тарихыңды белмәй тороп, халҡыңдың киләсәген ҡайғыртыу мөмкин түгел, шул уҡ Зәки Вәлиди ҙә быға асыҡ миҫал. Әле уның кеүек илдәге һынылышты тойған, бөтөн ситуацияны яҡшы аңлаған, иҡтисадты белгән лидер кеше килеп сығыуын көтәбеҙ. Ул мотлаҡ хәрби кеше йә сәйәсмән булмаҫҡа ла мөмкин, тик халыҡ мәнфәғәттәрен үҙенекенән өҫтөн ҡуйған, башҡорт рухлы, илһөйәр шәхес тип күҙ алдына килтерәм уны.

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Тарихыбыҙ шанлы, данлы, йәш быуынға фәһем бирерлек. Салауат Юлаев, Ҡаһым түрә, Зәки Вәлиди кеүек бөйөк шәхестәрҙе, һис шикһеҙ, онотторға ярамай. Ләкин алдыбыҙға юғары маҡсаттар ҡуйып, бөгөнгө менән йәшәргә кәрәк. Юғиһә, боронғоно иҫкә төшөрөп зарланабыҙ ҙа, илайбыҙ ҙа, күңелдәге зарҙы сығарыр өсөн ҡурайҙа уйнайбыҙ ҙа, эш шуның менән бөтә. Башҡорт ғүмер буйы ҡурай уйнап, һыбай йөрөгән икән, бөгөн уға атынан төшөп, ҡурайын ситкә ҡуйып тороп, иң һыҙғанып эшләй башларға кәрәк. Рәсәй һәм донъя кимәлендәге цивилизациянан артта ҡалмаҫ өсөн тырышырға кәрәк.

**▸ Эшеңде балаларың дауам итерлек булмаһа, үҙеңдең генә тырышыуыңдың мәғәнәһе лә юҡтыр?**

**Д. АЛЛАЯРОВ:** Тырышып, үҙ көсөң менән ойошторған эшеңде елгә осороп ҡуйығы килмәй, әлбиттә. Шулай ҙа мин үҙем өсөн эшләйем, балаларымдың юлымды дауам итеүҙәрен бик үк теләмәйем. Сөнки эшҡыуарға үҙен яҡлауы ауыр, беҙгә бер ҡайҙан, бер кем дә ярҙам итмәй. Баш ҡалабыҙҙа эшләп, уҡып йөрөүсе балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем эшҡыуарҙарға ҡарата мөнәсәбәттәрҙе күреп, үҙҙәре лә минең эште дауам итергә теләк белдереп бармай. Ситтән килеп, күберәк аҡса төртөүселәргә ер ҙә, урман да еңел генә бирелә, ә урындағы халыҡ хатта диләнкә лә ала алмай. Беҙҙең Әбйәлил яҡтарында төҙөлөш өсөн дә ер алып булмай, тотош Силәбе өлкәһе байҙары һатып алып бөткән. Ер өсөн һалым, кадастр хаҡы бигерәк юғары. Үҙемдең 4 объектым бар, уны арендалаған өсөн хаҡ түләйем, һатып алырға 2-3 миллион кадастр хаҡы түләргә кәрәк. Үҙебеҙҙең башҡорттарға аҫаба халыҡ булараҡ ниндәйҙер ташламалар индергән закон кәрәк ине лә бит. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн үҙебеҙҙең депутаттар булыуы шарт.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә, моғайын, кемдәрҙелер уйландырыр. Кемдәрҙер үҙ һорауҙарына, мәҫәлән, ни өсөн үҙебеҙҙең олигархтар булмауы тураһындағы һорауына ла, яуап алыр. Эйе, әлегә башҡа халыҡтағы һымаҡ "Форбс" исемлегенә ингән байҙарыбыҙ юҡ, әммә был турала хыялланмайбыҙ ҙа. Үҙ ватанын һөйгән, халҡы мәнфәғәтен хәстәрләгән эшҡыуарҙар үҫтереү - маҡсатыбыҙ. Ошоға өлгәшергә яҙһын яҡын йылдарҙа.**

**Илдар ҒӘБИТОВ**
**әңгәмәләште,**
**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

✓ *Күберәк яҡшы уйҙарға, файҙалы фекерҙәргә, ыңғай ниәт-маҡсаттарға иркенлек биреү - ихтыяры көслө кешенең өҫтөнлөгө. Шул саҡта ғына йән сәғәтенең йөрәге - хәтере теүәл эшләй, телдәре - аңы етеҙ хәрәкәттә була.*



ФӘҺЕМ ӨСӨН

# УЙЛАНДЫРЫР БОЛЪЯУ ҺҮҘ

**Билдәле булыуынса, XV-XIX быуаттар Рәсәй батшалығының Көнсығышҡа әүҙем үтеп инеү сәйәсәте менән нарыҡлана. Ошо быуаттар һуҙымында Рәсәй Ҡаҙан, Хажитархан, Ҡырым ханлыҡтарын ҡыйрата, Көнбайыш Себерҙе яулай, Урта Азия ханлыҡтарын баҫып ала, Ҡаҙағстанды дүрт айырым генерал-губернаторлыҡҡа бүлә. Шуның һөҙөмтәһендә, ҡасандыр бер рухи-мәҙәни ҡаҙанда ҡайнап йәшәгән төрки-мосолман халыҡтарының тормоштарына сит мәҙәни традициялар үтеп инә башлай, уларҙың меңәр йылдар дауамында барлыҡҡа килгән тормош-көнкүреш ысулдарына юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янай. Иң аянһыслыһы шул: был ҡотолғоһоҙ процестар яулап алынған халыҡтарҙың иң яҡшы ерҙәрен тартып алыу, уларҙы аяуһыҙ иҙеү фонында алып барыла.**
**Ошондай шарттарҙа колонизацияланған халыҡтар араһынан үҙ милләтенең рухи мәҙәниәтен, уның фәлсәфәүи ҡараштарын үҙ хәтерендә һаҡлаған һүҙ оҫталары - сәсәндәр, аҡындар күтәрелеп сыға. Улар ҡул ҡаушырып, тел йәшереп ултырмай - ят цивилизация ҡыҫымына үҙ ҡараштарын белдерергә тырыша. Был Бохар, Асан Ҡайғы, Шалғыйыҙ, Ҡаҙтуған кеүек уртаҡ йырауҙар ижадында, уларҙың традицияларын дауам итеүсе башҡорт сәсәндәре Ҡобағош, Мәхмүт, Байыҡ, Ҡарас, Ишмөхәмәт Мырҙаҡай ижадтарында, ҡаҙаҡ аҡындары Шал аҡын, Көтәш, Аҡтанбирҙе, Өмбәтәй, Мөхәмәт Үтәмеш улы, Дуҫмәмбәт, Аҡтан Кирәй улы кеүек аҡындарҙың тулғауҙарында дауам итә.**
**Бөгөн гәзит уҡыусыларға ҡаҙаҡ араһынан сыҡҡан һүҙ оҫталарының береһе Аҡтан Кирәй улының (1850-1912) болъяуын үҙ тәржемәмдә тәҡдим итмәксемен. Болъяу тигән төшөнсә элек башҡорт телендә әүҙем ҡулланылышта булып, хәҙерге көндә ул онотолоп барған һүҙҙәрҙең береһе. Болъяу - тимәк, күҙ алдына килгәнде алдан тәғәйенләү, билдәләү. Уны, ябайлаштырып, әүлиәлек ҡылыу тип тә атарға була. Һәр хәлдә, Аҡтан Кирәй улының йөҙ йылдан да элегерәк ижад иткән болъяуында сит мәҙәниәттең төрки-мосолман халыҡтарына ниндәй хәүефтәр алып килгәнен күрәҙәлек итеүен бөгөнгө көндә лә актуаль тип иҫәпләргә була.**

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.**

## ҠАҘАҒЫМ БӨЙӨК ИЛ ИНЕ

Бисмилләһи рахман рахим -
Элек баш һүҙ шул ине.
Аҫыл һүҙҙе баһалар
Ҡаҙағым бөйөк ил ине;
Рухы мәңге шиңмәҫтәй
Тыумасаға мул ине;
Төкәнмәҫтәй байлығы
Балҡып ятҡан күл ине;
Ағалары ҡустыға
Өлгө булыр юл ине;
Ир-егеттәр һүҙ башлап,
Илем ҡотҡа тулы ине;
Олоға кесе бағынып,
Илдә дөрөҫ заң ине;
Аталарҙың аҡ юлы
Һәммәһенә дан ине;
Аталарҙың аҡ һүҙе
Илебеҙгә им ине;
Яҡшы заттар ил тотоп,
Ямансылыҡ кәм ине;
Боронғоноң ирҙәре
Теремек, эре йән ине.

Алдағыны болъяһам -
Ҡара шаршау ҡорғандай;
Ахырызаман болото
Ил өҫтөндә торғандай;
Көндөң нуры һүрелеп,
Яҡшыны яман еңгәндәй;
Аҡһаҡаллыҡ ҡаяһы
Ишелеп, ергә һеңгәндәй;
Түбән йәнле ямандар
Аҫыл һүҙҙе күмгәндәй;
Яуыз булған заттарҙың
Һүҙе өҫкә менгәндәй.

Ай, киләсәк, киләсәк! -
Аҫылдан көн китәсәк;
Яманға яҡшы бағынып,
Тотҡонда яфа сигәсәк;
Башлыҡтары илемдең
Башына илдең тибәсәк;
Илде тотҡан яҡшының
Йәне илдән биҙәсәк;
Бер аҙ ҡатлам, һатынып,
Һартҡа әйләнеп бөтәсәк;
Аҡсаһына маһайып,
Бөркөт булып, ҡарағош,
Ҡан-ҡәрҙәшен бөрәсәк;
Йылан булып, кеҫәртке
Ыҫылдап сағып йөрөйәсәк;
Арлан булып, кәнтәйҙәр
Иленә ҡарап өрәсәк;
Арыҫлан булып, төлкөләр
Ялпыға ҡарай киләсәк;
Сабандар уҙып бәйгелә,
Толпарға арба егәсәк;
Аҡыллы, аҫыл азамат,
Ямандарға баш эйеп,
Маңлай тирен түгәсәк,
Наһырын ергә бөгәсәк;
Ил терәге - аҡһаҡал
Юҡ иҫәпкә керәсәк;
Ағай-эне, дуҫ-яран,
Бер-береһен үлтереп,
Татыулыҡ шәме һүнәсәк;
Шайтан һыуы - шараптар
Ил аҙығы буласаҡ;
Ил ағаһы иргә ул
Нәжес булып йоғасаҡ;
Дауаһыҙ сирҙәр күбәйеп,
Ергә афәт һибәсәк;
Аҡ юлдағы муллалар
Илен талап, һүгәсәк;
Баҡсы-маҙар күбәйеп,
Илдә мәхшәр тыуасаҡ;
Бер-береһенә әҙәмдәр
Ярҙам итмәй уҙасаҡ;
Ил алдына һөнәрмән
Сыҡмай, боҫоп бөтәсәк;
Етемгә мал бирерлек
Йомартлыҡ байҙан китәсәк;
Ҡол-ҡотандар бей булып,
Араһын илдең бүләсәк;
Болъяй алмай алыҫты,
Аяҡ аҫтын күрәсәк;
Илем, тарып эскегә,
Ҡыйын ғүмер һөрәсәк;
Түрә булыр бейҙәрҙең
Төшөнә аҡса керәсәк;
Үҫтергән ҡыҙ, килендәр
Ата-әсәгә төкөрәсәк;
Никахһыҙ йәштәр ҡушылып,
Уттары янмай һүнәсәк;
Тере етем күбәйеп,
Шәфҡәт күрмәй үҫәсәк;
Бер гонаһһыҙ сабыйҙар
Кәрәкһеҙ булып тыуасаҡ;
Оят китеп ҡыҙҙарҙан,
Ғәүрәт ерен асасаҡ;
Еҙ тырнаҡлы, ялбыр сәс
Ен килбәтен аласаҡ;
Ата-әсә ул-ҡыҙҙың
Әйткәненә күнәсәк;
Туй-байрамды асаһы
Ир-егеттең юлына
Бисәләр сөй ҡағасаҡ;
Юл башлайһы кәмәне
Киленсәктәр йөрөтәсәк;
Намыҫын ирҙәр юғалтып,
Бер килен юл башлаһа,
Һис кем ҡалмай эйәрәсәк;
Бисә булып ир-аттар
Ғәйбәт йыйып ятасаҡ;
Дошманға түгел батырҙар -
Иленә уҡ атасаҡ.

Ошоларҙы болъяған -
Кинйә ауылдан Аҡтанмын.
Олатайҙар әрүахы
Һеҙҙе һаҡлап торасаҡ;
Аҫыл илем, ҡаҙағым
Барыһын йырып уҙасаҡ.
Шуға күрә, Аҡтан ҡарт,
Төҙәлер, тип, орпағым,
Өмөт йыры һуҙасаҡ!..

Был донъяла көллөһөн
Бар ҡылыусы Алланың
Әжере беҙгә күп ине.
Һыйынһағыҙ хаҡ дингә,
Мәрхәмәтле Алланың
Әжере бөтмәҫ һис кенә.

**Аҡтан Кирәй улы.**

УЯН, УЙЛАН...

# ХӘТЕР СҮПЛӘНҺӘ...

## аңды томалай

**Намыҫ, аңдың томаланған сағы,**
**Хакимдарҙың һуҡыр, һаңрау сағы,**
**Ямандарҙың тамам аҙған сағы,**
**Яһилдарҙың донъя "һауған" сағы,**
**Вәғәҙәләрҙең "күктән яуған" сағы -**
**Әҙәмдәрҙең күптән яҙған сағы!..**



Тарих ул үткән йөҙ, мең йылдар ғына түгел, ул - халыҡтың үткән юлы. Кисәге көн дә - тарих! Кисәге көн дә, ниндәй генә данлы эштәргә, йәки аянһыслы хәлдәргә шаһит булмаһын, тарихи дөрөҫлөктә яҙылырға тейеш! Тарихты заманға, сәйәсәткә ҡулайлаштырып маташыу - ағастың тамырын ҡырҡып, уның урынына ботаҡ ялғауға тиң. Ул ботаҡ ҡасандыр серреп, зарарлап, ағасты йығыуы ихтимал. Шуның кеүек, тарих һәм быуындар яҙмышы ҡупшылау, матурлауҙарға мохтаж түгел, сөнки бындай яһалмалыҡтан зыяндан башҡа бер файҙа ла юҡ. Һәр дәүерҙә халыҡ тарихы һәм быуын яҙмышы үҙенә күрә ҡабатланмаҫ бөйөклөккә эйә һәм оло ихтирамға лайыҡ...

Халыҡ хәтере - күп төрлө ағаслы, сәскә-үләнле, емеш-еләкле, сытыр-сатырлы урман. Урманды кешеләр быуаттар, быуындар дауамында сәсеү ерҙәрен киңәйтеү, ағас эшкәртеү, юлдар һалыу һәм башҡа һылтаныуҙар менән даими ҡырҡа, тамырҙарынан йолҡа, яндыра, аяуһыҙ ҡыра тора. Ләкин шул уҡ кешеләр, мөһимерәк шөғөл табыпмы, ялҡауланып йәки башҡа сәбәптәнме, емереү кәсебен ташлаһа, хатта әллә нисә быуын элек тамырынан ҡоротолған урмандар ҙа үҙҙәренең элекке торошон кире ҡайтара, ағас-ҡыуаҡтар фәҡәт элек үҫкән ерендә тергеҙә! Иҫ-аҡыл етмәҫлек мөғжизә был! Нисә тапҡыр ҡырҡылып, яндырылып, һөрөлөп, аҫты-өҫкә әйләндерелгән ер барыбер элекке хәлен хәтерләй һәм тергеҙә! Был хәлдең мотлаҡ шулай булырына шик юҡ, сөнки беҙ бала саҡта ағастары араһында йүгереп йөрөгән урмандар бөгөн кире терелә. Колхоз, совхоздар тарҡалып, ер эшкәртеү шөғөлө ҡырҡа кәмегәс, элекке урман, сауҡалыҡтар урынында яңынан шул уҡ төр ағастар үҫеп сыға. Был ғәжәп күренеште башҡа яҡтарҙа ла күҙәтәләрҙер...

Йәмғиәттә лә шулай: халыҡ хәтерен алдап, арбап, албырғатып, алйытып, юҡ итеп маташһалар ҙа, халыҡ тарихы, милли асылы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәре хәтерҙең тылсымлы һандыҡтарында һаҡланыуҙы дауам итә барыбер...

Бөгөн йәштәр вайымһыҙ, ғәмһеҙ, толҡаһыҙ, уйынкөлкөгә генә шәптәр, тиһәк тә, улар араһында тарихи дөрөҫлөктө тергеҙеүселәр, яҡлаусылар, халҡының асылына тоғролар, тормошта намыҫлы йәшәү юлын эҙләүселәр бихисап, шөкөр! Өлкәндәр уларҙың юлдарын ҡыймаһа, моғайын, үҙ шөғөлдәрен, үҙ урындарын табырҙар. Шулай булыуы ғәжәп түгелдер, сөнки дөйөм халыҡ хәтеренән башҡа, һәр кешенең йәнендә үҙ ваҡытын, ғәмәлдәрен үлсәп, хәл-ваҡиғаларын барлап торған сәғәте бар. Ул сәғәттең "йөрәге" - хәтер, телдәре - аң. Йән сәғәте кәрәк саҡта үткән ғүмерҙең һәр минутын, һәр миҙгелен тергеҙеп, кәрәк мәғлүмәтте хәтер һандығынан эҙләп табып, аңды хәрәкәтләндерә. Аң хәтерҙән алған мәғлүмәттәрҙе өйрәнеп, баһалап, һығымта яһай, үткәндәрҙе байҡай, бөгөнгөләрҙе барлай, киләсәкте күҙаллай. Һәр кемдең аңы - үҙ йәненең етәксеһе лә, намыҫы ла, хакимы ла, яҙалаусыһы ла. Хәтер теүәллеген, аң сафлығын һаҡлайым тигән кеше насар уйҙар, зарланыуҙар, ғәйбәт хәбәрҙәрҙән һаҡланырға тырыша. Сөнки хәтерҙе яуыз ниәттәр, боҙоҡ фекерҙәр, насар ҡиәфәттәр менән сүпләү аңды томалай, ыңғай уйфекерҙәрҙе үҙләштереү һәләтен сикләй. Шуның өсөн хәтер һандығын көсләү, сикләү, ҡыҫырыҡлауҙарҙан азат итеп, күберәк яҡшы уйҙарға, файҙалы фекерҙәргә, ыңғай ниәт-маҡсаттарға иркенлек биреү - ихтыяры көслө кешенең өҫтөнлөгө. Шул саҡта ғына йән сәғәтенең йөрәге - хәтере теүәл эшләй, телдәре - аңы етеҙ хәрәкәттә була.

Һәр кешенең хәтерендә һаҡланғандарҙан халыҡтың тарихы туплана, асылы күҙаллана. Әгәр һәр кемдең хәтер сәғәте камил эшләй икән, халыҡ тарихы сәғәте лә ватылмай, яңылышмай, быуаттар дауамында тоғро хеҙмәт итергә һәләтле. Үткәндәренә ихтирамлы, бөгөнгөһөнә иғтибарлы, халыҡтың уй-ниәттәре яҡты, йәшәйеше лайыҡлы.

*Төн уртаһы. Серле ваҡыт.*
*Хәрәкәтһеҙ. Сәғәт ватыҡ.*
*Сәғәт һатып алып була,*
*Һатып алып булмай ваҡыт.*
*Сәғәт теле туҡтап ҡалды.*
*Һәләкәтен белә аңлы:*
*Кисәге көн үтеп китте,*
*Иртәгәһе тыумай ҡалды.*
*Хәрәкәтһеҙ төн уртаһы:*
*Ваҡыт имен. Сәғәт ватыҡ.*
*Ҡурҡма, йөрәк, көн арҡаһын*
*Шулай үтә серле ваҡыт.*
*Сихырлы төн. Өй алдында*
*Өйөрөлөп елдәр олой.*
*Өйҙә кеше күкрәгендә*
*Хәүефләнеп йөрәк илай...*

**Урал МОСТАФИН.**

*✓ Битарафмы беҙ, әллә вайымһыҙбыҙмы? Милләтебеҙҙә һүлпәнлек бар. Мәктәптәрҙең ябылыуына ла күҙ йомдоҡ. Клуб емерелеп төштөмө - төштө. Эсте бошорған күренештәргә тыуған яҡҡа ҡайтҡан саҡта шаһит булаһың бит инде.*

ИЖАДХАНА

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ -Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры актеры Илһам РӘХИМОВ менән ижад һәм тормош ҡапма-ҡаршылыҡтары, театр донъяһындағы, актерҙар тормошондағы ҡайһы бер ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ, халҡыбыҙҙың бөгөнгө хәленә байҡау яһайбыҙ. Эшенең үҙенсәлеге арҡаһында гел халыҡ араһында йөрөгән артистар ниндәй уй-хыялдар менән йәшәй? Уларҙы бөгөнгө ниндәй проблемалар борсоуға һала? Геройыбыҙҙың фекерҙәрен түбәндәге әңгәмә барышында белә алаһығыҙ.**

# БЕҘ УЙНАМАЙБЫҘ,

## беҙ сәхнәлә йәшәйбеҙ!



**➔ Кешелә ижад осҡондары барлығы, ғәҙәттә, бала сағынан уҡ төҫмөрләнә. Ул осҡондарҙы дөрләтеп ебәреү өсөн этәргес көс биреүсе өлгө, остаз да кәрәк. Актерлыҡ һәләтегеҙҙе үҫтереүгә, театрға йөҙ бороуығыҙға кемдәр булышлыҡ итте?**

- Уйлана башлаһаң, уйҙарҙан уйылып китерлек: кеше үҙен һаҡлаусы, ҡурсалаусы фәрештә ҡанаты аҫтында тыуа, тигән ышаныу бар бит халыҡта. Был фекер менән килешмәү мөмкин түгел. Тормош юлында миңә лә дөрөҫ юл күрһәткән, ошо юлдан йөрөткән, ситкә тайпылдырмаған фәрештәм барлығына ышанам хәҙер. Ә юл былай булды: тыуған ауылым Стәрлебаш районы Табылды ауылы мәҙәниәт йортондағы үҙешмәкәр театр, бейеү түңәрәктәрендә бәләкәйҙән шөғөлләнеүем минең артабанғы сәхнә тормошома этәргес булды. Хыялым мине 1987 йылда унынсы синыфты тамамлағас та туп-тура Өфө дәүләт сәнғәт институтына алып килде. Институтта Башҡорт дәүләт академия драма театрының баш режиссеры Рифҡәт Исрафилов курсына эләктем, институтты ла 1991 йылда уңышлы ғына тамамланыҡ, шул уҡ йылдың апрель айында Стәрлетамаҡта театр асылды. Театрҙы ойоштороу эшен баш режиссер Гөлдәр Мозафар ҡыҙы Ильясова бынамын тигән итеп атҡарып сыҡты. Илшат ағай Йомағолов та ул йылдарҙа унда эшләне. Беҙ, курсыбыҙҙан бер-нисә йәш белгес, институтты тамамлағас та туп-тура Стәрлетамаҡ театрына ҡайтырға һөйләшкәйнек. Әммә курсыбыҙ Башҡорт дәүләт академия драма театры өсөн артистар әҙерләгәс, күптәребеҙ баш ҡалала ҡалды. Стәрлетамаҡ театрына бер үҙем ҡайттым. Тыуған яғым булғанғалыр, был ҡала мине элек-электән үҙенә тартты. Яҙмышымды ошо ҡала менән бәйләүемә бер ҙә үкенмәйем. Әйткәндәй, тап ошо ҡалала ике йыл эшләгәндән һуң үҙемдең курсташым Физәлиә Ғәлина (Башҡортостандың халыҡ артисы) менән ғаилә ҡороп ебәрҙек. Тормош тигәнең ҡыҙыҡ: курсыбыҙҙағы биш ҡыҙҙың дүртәүһе студент саҡта уҡ үҙебеҙҙең курс егеттәренә кейәүгә сыҡҡайны, бишенсеһен мин ҡулымдан ысҡындырманым. Шулай, бер ҡыҙыбыҙҙы ла ситкә ебәрмәнек. Хәҙер тоталар ҙа, "Ҡыҙҙарыбыҙ сит милләт кешеләренә кейәүгә сыға", тип яу һалырға яраталар. Ҡыҙҙарҙы ситтәргә ҡалдырырға ярамай! Был да бик етди мәсьәлә.

**➔ Ҡайһы саҡта күңел торошоңа тап килмәгән ролдәрҙе лә уйнарға тура киләләр. Күңелегеҙ төшөнкө саҡтарҙа үҙегеҙҙәге бөтмәҫ-төкәнмәҫ күтәренке рухты ҡайҙан алаһығыҙ?**

- Институтта уҡығанда беҙгә ролгә башкөллө инеп китеп, уның эсендә йәшәргә, тормошонда ҡыйынлыҡтар килеп сыҡҡанда үҙеңде сәхнәлә нисегерәк тоторға кәрәклеген бик ентекләп өйрәттеләр. "Станиславский мәктәбе" тип аталған актерҙар мәктәбен үтеүебеҙгә бер ҙә үкенмәйем. Был тәғлимәттең философияһы "уйнау" һүҙе менән бик тап килеп бөтмәй. Беҙ ҙә ул һүҙҙе ҡулланмаҫҡа тырышабыҙ. Ни өсөн икәнен хәҙер аңлатам. Стәрлетамаҡта башҡорттар ҙа, рустар ҙа күп. Беҙҙең театрға рус телле, рус милләтле тамашасылар ҙа күп йөрөй. Ул тамашасылар беҙгә: "Һеҙҙең спектаклдәрегеҙҙә йәшәү көслө, уйын юҡ, шуға ла беҙ һеҙгә йөрөргә яратабыҙ", - тиҙәр. Беҙҙең милли театр шул яҡтан алдыра, минеңсә. Бының сәбәбе - халҡыбыҙҙың тәбиғәтендә. Башҡорттар бик боронғо, ихлас халыҡ: улар яһалмалыҡты өнәмәй. Халҡыбыҙҙың холоҡ үҙенсәлеге өҫкә сыға, әлеге лә баяғы...

Тормоштағы ҡыйын саҡтарға килгәндә, әлбиттә, улар беҙҙән һорап килмәй. Күңелдәге һағышты беҙ тап сәхнә ярҙамында баҫабыҙ ҙа инде. Икенсе яҡтан, театрға ял итеү, күңел асыу өсөн килгән тамашасы актерҙың кәйефе булмағанға ғәйепле түгел, тип ҡарайбыҙ, шуға ла күңел төшөнкөлөгөнә урын ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ. Уй-хистәреңде көйләй белеү профессиональ әҙерлек тә талап итә. Әгәр тамашасыларыбыҙ онотолоп, уй-хәсрәттәренән арынып, беҙ бүләк иткән ял минуттарынан ҡәнәғәтлек алып ҡайта икән, ижадымдың мәғәнәһе лә, асылы ла ошолор, тип уйлайым.

Тормошта юмор бик ярҙам итә бит ул. Юморҙы аңлауым, уны тамашасыға еткерә алыуым менән бәхетлемен. Ҡайһы кеше юморҙы аңламай, буш-юҡҡа көйәләнә башлай. Ә күпме сетерекле хәлдәрҙән юмор ярҙамында сығып була!

**➔ Һеҙҙе тамашасылар М.Кәримдең "Ҡыҙ урлау" комедияһындағы Мөхәмәтша, М. Ҡунафиндың "Тыңлайыҡ ваҡыт аҡҡанын"да - баш табип, Б. Бикбайҙың "Ҡоҙаса" музыкаль комедияһында Яппар ҡарт, Н. Ғәйетбаевтың "Иремде һатам" комедияһында Миҙхәт ролдәре аша яҡшы белә. Һеҙ башҡарған драматик ролдәр ҙә тамашасы күңеленә үтеп инә. Бынан тыш, һуңғы йылдарҙа республика халҡы һеҙҙе "Күңелле йәшәйбеҙ" тип аталған көләмәстәр сериалы аша ла таный. Ошо телевизион проект тураһында ентекләберәк һөйләп үтһәгеҙсе.**

-"Күңелле йәшәйбеҙ" тапшырыуын беҙ 2008 йылдан башлап хәҙер инде 6 йыл дауамында эшләйбеҙ. Ул башта үҙебеҙҙең Стәрлетамаҡ телевидениеһында, "Туған тел" каналында күрһәтелде, хәҙер (дүрт йыллап барҙыр), Башҡортостан юлдаш телеканалы эфирына ла сығарыла. Был юмористик тележурналды Руслан Юлтаев исемле егетебеҙ төшөрә. Режиссерыбыҙ бик аҡыллы, һәләтле, үҙ эшен белеп башҡарыусы белгес: аныҡ ҡына итеп әйтә лә, шатырлатып, эшен эшләп тә ҡуя. Коллектив та уның менән бик ҡәнәғәт. Руслан беҙҙең театр өсөн ҙур эш эшләне: һәр артисыбыҙҙы республикаға танытты. Йәштәргә күтәрелеүе ауырыраҡ - билдәлелек яулау өсөн оҙайлы ғына ваҡыт талап ителә. Ә беҙҙең йәштәребеҙҙе телевидение аша белеп, танып торалар.

**➔ Тормоштағы Илһам ағай менән сәхнәләге Илһам ағай араһында айырма бармы? Әгәр бар икән, ул нимәлә сағыла? Күптәр билдәлелек яулауҙы тормош маҡсаты итеп ҡуя. Ә һеҙ, ишетеүемсә, үҙегеҙҙе йәмәғәт урындарында танытмаҫҡа тырышаһығыҙ. Бының сәбәбе ниҙә?**

- Сәхнәләге Илһам менән тормоштағы Илһам - икеһе ике төрлө кешеләр. "Мин артисмын", тип, тормошта уйнап йөрөй, үҙемде башҡаларҙан өҫтөн ҡуя алмайым. Минең бергә үҫкән дуҫтарым, ауылдаштарым, бер подъезда йәшәгән, минең менән бер лифтта йөрөгән күршеләрем бар. Тормошта беҙ бөтәбеҙ ҙә бер тигеҙбеҙ. Шуның өсөн сәхнә - бер яҡта, тормош - икенсе яҡта.

Һорауығыҙҙың икенсе өлөшөнә килгәндә, ысынлап та, мин тормошта кеше күҙенә күренеп барырға бик тырышмайым. Сөнки, беҙҙең ҡала артыҡ ҙур ҙа түгел... Был холҡом менән дә бәйлелер, бәлки.

**➔ Улай булғас, холҡоғоҙ баш бала холҡона оҡшаш, буғай... Әйткәндәй, һеҙ ниндәй атай тәрбиәһе алдығыҙ? Ғаиләгеҙ хаҡында ла һөйләп үтмәҫһегеҙме?**

- Юҡ, мин биш балалы ишле ғаиләлә дүртенсе бала булып донъяға килгәнмен. Ике апайым, ағайым, ҡустым бар. "Атай тәрбиәһе"нә ҡайтҡанда, беҙҙең быуын балаларына атай тәрбиәһе эләктеме икән? Был турала йыш ҡына уйланғаным бар. Беҙҙең заман атайҙары колхоздың иң сәскә атҡан көслө ваҡытында эшләне. Атайым Ринат Рәхимов райондың алдынғы комбайнеры булды. Күберәк ер һөрөргә, күберәк ашлыҡ урырға тырышты. Ни өсөндөр, беҙ бәләкәй саҡта гел ҡоролоҡ булды, атайҙар һәр саҡ һалам "пресларға" ситкә йөрөнөләр: бер ҡышты Краснодар крайында, бер ҡышты - Хәйбулла районында, бер ҡышты - Украинала, бер ҡышты Ҡаҙағстанда ҡышланы улар. Атай ҙа, әсәй ҙә колхоз эшенән бушаманы. Шулай ҙа, беҙҙең заман балаларына әсәй тәрбиәһе ныҡыраҡ эләкте. Элек халыҡты "иң тәүҙә - эш, аҙаҡ - ғаилә" тигән принцип менән тәрбиәләгәндәрҙер инде. Миңә өләсәй тәрбиәһе эләкмәне. Атайым һуғыш ваҡытында етем ҡалған, туғандары ҡарамағында үҫкән. Олатай, өләсәйҙәре булған кешеләргә мин һәр ваҡыт көнләшеп ҡарай торғайным. Хәҙер үҙебеҙҙең атай-әсәйҙәребеҙҙең булыуы, уларҙың ейәндәре менән аралаша алыуы ифрат яҡшы күренеш. Ата-әсә тәрбиәһенән бигерәк, олатай-өләсәй (улар иҫән булһа) нәсихәте күберәк файҙа бирәләр, тип уйлайым. Быуындар күсәгилешлеге ҙур әһәмиәткә эйә. Атай, әсәй, ғәҙәттә, эш менән мәшғүл булып, күп нәмәне күҙ уңынан ысҡындыра. Ә олатай, өләсәйҙәр - күҙ-ҡолаҡ. Ата-әсәле ғаилә генә тулы түгел - олатай-өләсәйле ғаилә ысын мәғәнәһендә "тулы ғаилә" тип әйтер инем. Әсәйем Асия Рәхимова тыуған ауылыбыҙҙа үҙҙәре ҡорған нигеҙҙе һыуытмай (атайыбыҙ донъялыҡта юҡ инде), беҙ уға йыш ҡайтып йөрөйбөҙ. Үҙемдең ғаиләгә килгәндә, бер малай, бер ҡыҙ үҫтерәбеҙ. Улыбыҙ Юлдаш БДУ-ның иҡтисад факультетының 4-се курсында, ә ҡыҙыбыҙ Алһыу - Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө лицейында 8-се синыфта уҡыйҙар.

**➔ Һеҙҙе алға әйҙәгән берәй хыялығыҙ бармы?**

- Әле көстөң ташып торған мәле. Бер уйлаһаң, дәрт тә етерлек. Йәшлек тә үтеп китмәгән һымаҡ. Уйнарға ла, уйнарға. Хыялым - ҙурыраҡ ролдәр башҡарыу. Беҙҙең менән эшләйбеҙ, тип янып торған режиссерҙар күберәк килһен ине театрыбыҙға. Беҙ уларҙы көтәбеҙ. Шәхси тормошомдағы хыялым - балаларҙы тормош юлына аяҡ баҫтырыу. Бөтөн нәмә: яҡшыһы ла, яманы ла еңел бирелә, еңел табыла торған заманда йәшәйбеҙ. Йәштәрҙең "ысҡынып" ҡына бара торған ваҡыты. Шуның өсөн балаларыбыҙҙы дөрөҫ юлға аяҡ баҫтырыуҙы төп маҡсатым итеп билдәләгәнмен.

**➔ Халҡыбыҙҙың бөгөнгөһөнә ниндәй ҡараштаһығыҙ? Һеҙҙе нимәләр һағайта? Нимә уйландыра?**

- Халыҡ менән йыш аралашырға тура килә. Беҙ башҡорттар күпләп йәшәгән күрше өлкәләргә гастролдәргә йыш сығабыҙ. Башҡортостанды ул өлкәләр менән сағыштырғанда, беҙ бер аҙым алда һымаҡбыҙ. Ситтә йәшәгән башҡорттар милли мәҙәниәтебеҙгә, театр сәнғәтебеҙгә ныҡ һыуһап йәшәй. Улар йыш ҡына Башҡортостандағы тормош менән ҡыҙыҡһынып: "Телевизорҙан һөйләгәндәре дөрөҫмө?" - тип, беҙҙең республикалағы яҡшы хәлдәрҙе ҡабат-ҡабат һорайҙар. Ситкә сыҡһаң, беҙҙә барыһы ла һәйбәт кеүек, ә "өйгә" ҡайтһаң, барыбер халҡыбыҙҙың битарафлығы уйландырып ҡуя. Битарафмы беҙ, әллә вайымһыҙбыҙмы? Милләтебеҙҙә һүлпәнлек бар. Шуныһы бошондора. Мәктәптәрҙең ябылыуына ла күҙ йомдоҡ. Клуб емерелеп төштөмө - төштө. Эсте бошорған күренештәргә тыуған яҡҡа ҡайтҡан саҡта шаһит булаһың бит инде. Беҙҙең ауылда ла клуб емерелеп бара ине, яптылар ҙа, эш бөттө. Балалар һаны аҙ булғас, мәктәпте лә яптылар. Ҙур быуабыҙ бар ине. Уны һуңғы биш йыллыҡта, 1980-1985 йылдарҙа, быуғайнылар. Быуа ярҙамында яландарҙы һуғара торғайнылар. Районда бер бөртөк ине. Емерек хәлдә, тинеләр ҙә, уны ла йырҙылар ҙа ебәрҙеләр. Беҙҙең район - ҡоролоҡ зонаһы, беҙҙә ҙур һыуҙар юҡ. Ярай әле, колхоз эшләй. Ауылға илткән юлдар ҙа матур - асфальт һалынған, ауылдарға газ үткән.

Йәштәрҙең ауылда ҡалмауы, халыҡтың ситкә эшкә китеүе күңелде ҡыра. Ниңәләр, башҡа милләт вәкилдәре эш эҙләп беҙҙә төпләнеп, эш таба, ә беҙҙең милләт Себер тарафтарына "зимагорлыҡҡа" ашҡына. Ғаиләләрен ташлап китәләр, күҙ алдында ғаиләләр тарҡала. Тарҡала инде, ҡуҙҙар ҙа бер-береһенә яҡын ятмаһа, һүрелә, һыуына бит. Элек беҙҙең халыҡта "зимагор" тип кемде әйткәндәр? Минең аңлауым буйынса, яҙғы эш башланғас, иген сәскәндәр, бесәнен сапҡандар, игенен урғандар ҙа, көҙгө эште бөтөрөп, ҡышҡылыҡҡа ҡалаға "зимагор" булып, эшкә киткәндәр. Ә хәҙер бөтә милләт "зимогор"ға әйләнеп бара. Бының менән ризалашып булмай, ағай-эне. Йәштәребеҙ эш урындары асып ебәрһен, эшҡыуарлыҡты үҫтерһен ине.

Шулай ҙа, өмөтһөҙ - шайтан, тиҙәр. Хәҙер тормошобоҙ барыбер яҡшыраҡ инде ул. Халҡыбыҙға яңырыуҙы йәштәр алып киләсәк. Тик әлегә улар араһында лидерҙар күренмәй. Лидерҙарҙы күреп, үҫтерә беләйек. Йәштәрҙе үҫтермәһәк, милләтебеҙҙең киләсәге нисек булыр? Йәштәребеҙгә юлдар асыҡ, тик улар үҙ бәхетен ситтән эҙләмәһен. Бәхет тыуған ерҙә.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Әлеге һөйләшеүҙә ятраҡан артисыбыҙға - Илһам Рәхимовҡа төрлө һорауҙар бирҙек һәм береһенән-береһе матур, ҡыҙыҡлы яуаптар ишеттек. Шулай уҡ әңгәмә барышында шундай шаян актерҙың да күңелендә етди, үткер һорауҙар, ауыр һыҙланыуҙар ятыуы тураһында белдек. Хәйер, ҡунағыбыҙ үҙе лә: "Сәхнәләге Илһам менән тормоштағы Илһам - икеһе ике төрлө кеше", - тине бит. Шулай ҙа уларҙың икеһен дә Физәлиә апайға һөйөү берләштерә бит. Ана бит, ирле-ҡатынлы Рәхимовтар сәхнәлә лә, тормошта ла бер ғаилә булып йәшәй.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Һәр миҙгелдә лә баш ҡаланан йыраҡ китмәй генә хозур тәбиғәт ҡосағында ял итергә теләйһегеҙме? Улайһа, "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһына килегеҙ. Өфө ҡалаһының урманлы өлөшөндә, Ҡариҙел ярында урынлашҡан был шифахана республика һәм баш ҡала халҡына төрлө медицина хеҙмәттәре тәҡдим итә. Дауаханаға ҡарағанда, шифаханала сәләмәтлекте нығытыу күпкә уңайлыраҡ булыуын барыбыҙ ҙа беләү. "Йәшел сауҡалыҡ"тың Башҡортостандың башҡа шифаханаларынан айырмаһы һәм өҫтөнлөктәре нимәлә? Унда ниндәй сирҙәр менән яфаланыусылар мөрәжәғәт итә ала? "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы директорының медицина буйынса урынбаҫары Зөлфирә Хөсәйен ҡыҙы ЮЛДАШБАЕВА менән ошолар хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**



# "ЙӘШЕЛ САУҠАЛЫҠ" ДАУАҺЫ...

## тәнгә лә, йәнгә лә шифа

**▶ Республика үҙенең тәбиғәте менән генә түгел, тәбиғи сығанаҡтар нигеҙендә һауыҡтырыу эшмәкәрлеге алып барыусы шифаханалары менән дә дан тота. Ә "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһының төп йүнәлеше ниндәй?**

- "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы Башҡортостанда йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәрен дауалау, киҫкен йөрәк өйәнәге, йөрәккә һәм ҡан тамырҙарына операциялар кисергән, баш мейеһе ҡан әйләнеше боҙолған ауырыуҙарҙы реабилитациялау йүнәлешендә эшләгән берҙән-бер учреждение. Беҙ республиканың бөтөн дауаханалары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Миокард инфаркты кисереп, дауаханаға эләккән йәки эре ҡан тамырҙарына операциялар үткәргән ауырыуҙар шифахананың кардиореабилитация бүлегендә стационарҙа алған дауаһын нығыта. Шифахана был федераль программа буйынса асылған көнөнән алып эшләй, ә 2002 йылда иһә тағы ла нейрореабилитация бүлеге асылды. Ҡан әйләнеше боҙолоуынан, инсульттан һуң атлай ҙа, һөйләшә лә алмаған пациенттар менән терапевтар, неврологтар, логопедтар, башҡа белгестәр ҙә шөғөлләнә. Дауалаусы физик күнекмәләр, һыуҙа үткәрелгән гимнастикалар, ванналар шифаһын алып, йөҙҙәре алһыуланып, рәхмәттәр әйтеп ҡайтып китә улар. Бында эшләгән үҙ эшенең оҫтаһы булған һәр белгес, фән докторҙары һәм кандидаттары, көслө кардиологтар, неврологтар менән ғорурланабыҙ.

Бынан тыш, "Йәшел сауҡалыҡ"та ашҡаҙан, һөйәк-мускул ағзаларын, эндокрин һәм нервылар системаларын, тире, матдәләр алышыныуы боҙолоуын, тын алыу юлдары ағзаларын дауаларға мөмкин. Гинекология, урология йүнәлешендә эшләгән программалар ҡаралған. Йәғни, дауаланыу өсөн бында бөтөн шарттар ҙа бар. Сит илдәрҙә күңел асып, ял итеп ҡайтырға була, шулай ҙа һауа шарттарын алыштырмай ғына шифаханала ял итеүҙең үҙенең өҫтөнлөктәре күп. Һаулыҡ - ул ҙур байлыҡ, ваҡытында тикшерелеп, профилактик саралар күреп, сәләмәтлеккә, тимәк, күңел бөтөнлөгөнә эйә булырға ынтылһа ине кешеләр. Ышанығыҙ, үҙегеҙгә ошонан да ҙурыраҡ бүләк эшләй алмайһығыҙ, быны мин табип булараҡ әйтәм. Унан һуң, шифахана урынлашҡан матур тәбиғәт тә дауалай, беҙҙә һауа ла сафыраҡ, ҡар ҙа күберәк.

**▶ Башҡа сирҙәр менән бер рәттән, инфаркт, инсульт кеүек ауырыуҙарҙың "йәшәреүе"нең сәбәбе нимәлә, тип уйлайһығыҙ?**

- Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа бөтөн сирҙәр ҙә "йәшәрҙе", был инде ғилми яҡтан күптән раҫланған. Әгәр ҙә элек 30 йәшлек инсульт кисергән кешегә аптырап ҡараһаҡ, хәҙер 25 йәштә лә йөрәк ауырыуы менән яфаланыусылар бар. Бының төп сәбәбе - йәшәү рәүешенең үҙгәреүе. Дөрөҫ туҡланмайбыҙ, калориялы ризыҡтар ашайбыҙ, аҙ хәрәкәтләнгә күрә, уларҙы яндырып бөтмәйбеҙ. Физик эш кәмене, йәғни, көнкүреш еңеләйгән һайын, сәләмәтлегебеҙ ҡаҡшай бара. Йәшәү темпының көсәйеүе лә йоғонто яһай. Бөгөнгө йәш кеше яҡшыраҡ йәшәргә теләй, ә бер нисә эштә эшләү ҡан баҫымының, ҡан тамырҙарының тонусы күтәрелеүенә килтерә. Йәштәрҙең тыумыштан ҡан тамырҙары һығылмалылығы насар, был физик әүҙемлектең түбәнлегенән дә килләлер инде.

Даими көсөргәнештә йөрөү ҙә насар тәьҫир итә. Артыҡ ҡайғырма ла, артыҡ шатланма ла, ти торғайны өләсәйҙәр. Һәр хис йөрәккә төшә бит ул, шуға ла халҡыбыҙҙың алтын аҡылын тотоп, сабыр итеп йәшәргә өйрәнергә лә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта, нервы ауырыуҙарына еңелсә ҡарарға ла ярамай. Улар ҡапыл барлыҡҡа килмәй, тиҙ ҡыҙып барыусанлыҡ, баш ауыртыуы, әйләнеүе, ҡан баҫымының бер түбәнәйеүе, бер күтәрелеүе, йоҡлай алмау, хәүефләнеү тойғоһон, белгескә мөрәжәғәт итмәйенсә, дарыуҙар менән баҫырға тырышмағыҙ. Был билдәләр эндокрин сирҙәре менән дә бәйле була ала. Ошо ваҡытта бер аҙ туҡтап, үҙегеҙҙең организмығыҙҙы тыңлап алырға кәрәк. Хистәрендә кешеләргә күрһәтмәскә тырышып, артыҡ сабыр булыу бында кире эҙемтәгә килтереүе лә ихтимал.

**▶ Шифахана юғары сифатлы медицина ярҙамы күрһәтеүҙән тыш, тәбиғи сығанаҡтар ярҙамында ла сәләмәтлекте нығыта. Гәзит уҡыусыларҙы һыу менән дауалау серҙәре менән дә таныштырһағыҙ ине.**

- Һыу - тормош сығанағы ғына түгел, унда тәбиғәттең шифалы көстәре тупланғанлығын ата-бабалар борондан белгән. Шифаханалағы дауалаусы ванналар өсөн ҡулланылған көкөртлө водород Сочиҙың билдәле "Мацеста" ял йорто һыуынан айырылмай. Көкөрт тире, тын юлдары аша организмға үтеп инеп, нервылар системаһын, йоҡоһоҙлоҡто, невроздарҙы, склерозды һ.б. дауалай. Дерматит, дерматоз, экзема, псориаз, себорея кеүек тире ауырыуҙары, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр ауырыуҙары, артриттар, остеохондроз, умыртҡа бағанаһының башҡа ауырыуҙары, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре, мәҫәлән, гипертония, йөрәктең ишемик ауырыуы, веналарҙың киңәйеүенән бындай ванналар бик шифалы. Өфөлә йәшәүселәр шифаханаға килеп, был ванналарҙы курс менән дә ҡабул итә ала.

Тағы бер тәбиғи һыу сығанағы - "Нурлы" тип аталған эсә торған минераль һыу ашҡаҙан-эсәк, бауыр, үт ҡыуығы ауырыуҙарынан файҙалы. Бынан тыш, ылыҫлы, йодобромлы, скипидар, эвкалипт һәм башҡа төрлө ванналар, циркуляр душ, һыу аҫты душы, һыу аҫтында умыртҡа бағанаһын һуҙыу кеүек дауалар ҙа үҙен аҡлай.

**▶ Дауалау-диагностика комплексы белгестәре спорт-һауыҡтырыу йүнәлешендә лә әүҙем эшләй. Физик күнекмәләр шулай уҡ сәләмәтлек сығанағымы?**

- Көндө ябай ғына зарядканан башлау ҙа уны күпкә һәҙмәтләрәк итә. Беҙ шул рәүешле тәнебеҙҙең һомғоллоғон һаҡлап ҡалабыҙ, эске ағзаларҙың әүҙемлеген, матдәләр алышыныуҙы яҡшыртабыҙ. Шуға ла шифаханала спорт ярыштары, волейбол, өҫтәл теннисы, мини-футбол, бадминтон һәм баскетбол уйындары үткәреү өсөн ҡулайлашҡан төрлө функциялы ябыҡ майҙансыҡтан тыш, һауыҡтырыу йүнәлешендә ҙур эшмәкәрлек алып барыла. Мускулдарҙы нығытыу һәм тәнде матурлау өсөн тренажер залы бар. Тренажер залында шөғөлләнеү сыҙамлыҡты арттырып ҡына ҡалмай, тын алыу, ҡан әйләнеше, нервылар системаһы эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Бассейн менән сауна ла күптәрҙең күңеленә хуш киләсәк. Спорт залында һәм бассейнда дауалаусы күнегеүҙәр үткәрелә. Ҡышын каток, саңғы трассаһы эшләй. Спорт инвентарҙарын ҡуртымға алырға була.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Һуңғы йылдарҙа шифаханала Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килеп ял итеүселәр һаны арттҡандан-арта. Ял итеүселәр иғтибарына бөтөн уңайлыҡтары булған бер, ике урынлы номерҙар, люкс номер һәм люкс апартаменттар бар. Китапхана, балалар өсөн майҙансыҡ һәм уйын бүлмәһе, тренажер залы, солярий, оранжерея, ресторан, бар эшләй. Теләүселәр өсөн шифахананың Ял итеү һәм сервис үҙәге дискотека, төрлө бәйгеләр, турнирҙар үткәрә, филармония артистарының концерттары ойоштоpола. Өфө ҡалаһы буйлап экскурсиялар үткәрелә. Ҡыҫҡаһы, "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында ял итеүселәрҙе ҡабул итеү, сифатлы дауалау, реабилитациялау һәм ял итеү өсөн бөтөн шарттар бар. Шулай уҡ бында конференциялар, семинарҙар, юбилейҙар, тантаналы саралар үткәреү мөмкинлеге бар.**

**Сәләмәтлек - һәр кеше өсөн иң ҙур байлыҡ. "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы хеҙмәткәрҙәре һеҙ һау-сәләмәт булһын өсөн бар тырышлығын һалып эшләй һәм, һәр көнгә ҡыуанып, ауырыу-һыҙланыуһыҙ йәшәү үҙе бәхет икәнен онотмағыҙ, тип тә иҫкәртә.**




*"Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһының адресы:*
*Өфө ҡалаһы, Менделеев урамы, 136/5. Тел.: (347) 252-63-20,*
*факс: (347) 252-70-77. Күп каналлы телефон: 8-800-200-21-90.*
*E-mail: bron-on-line@mail.ru, www.green-kurort.ru*

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҠАРА ТУМЫРТҠА ТУРАҺЫНДА БЕР КӘЛИМӘ ҺҮҘ

Шуныһы үҙенсәлекле - осҡанда бер, ултырғанда икенсе тауыш сығара ҡара тумыртҡа. Ҡыҙыҡ булып китте. Мин был ҡошто яҡынданыраҡ барып күрергә булдым. Ағастарға ышыҡлана-ышыҡлана, аҡрын ғына тауыш килгән яҡҡа ыңлайланым. Әммә урман ҡошо әллә ҡайҙан ҡыштырҙап килгән кешене һиҙмәй буламы инде! Шунда уҡ осоп китте. "Кли-кли-кли" тигән тауышы ғына ишетелеп ҡалды.

Ҡайһы берәүҙәр яңылыштан ғына "Ана бит, бәхетле кеше, ҡара тумыртҡаның үҙен күрмәһә лә, исмаһам, тауышын ишетеп ҡалған", тип уфтанып ҡуйыр. Әммә бушҡа борсолмағыҙ, уны күбебеҙ ишеткәнебеҙ бар. Бары иғтибар итмәйбеҙ генә. Иҫләп ҡарағыҙ әле: бына ҡапыл урманда барабан һуҡҡан һымаҡ тауыш ишетелеп ҡала. Был тауыш яҡындараҡ булһа, хатта тертләп китәбеҙ. Шунан инде, был ниндәй тауыш булды әле, тип, һораулы ҡарашты бер-беребеҙгә ташлап ҡуябыҙ. Күптәр уны, бер ағастың ботағы һынып төшөп, икенсе ағастың олонона барып ҡыҫылған һәм ел ваҡытында ул шундай тауыш сығара, тип аңлатып ҡуя. Был дөрөҫ аңлатма түгел. Бындай тауышты ошо ҡара тумыртҡа сығара ла инде. Дөрөҫөрәге, ата тумыртҡа ошолай "барабан" һуға.

Әммә ата тумыртҡа буштан бушҡа барабан һуғып, эшһеҙлектән йонсоп, кәнсирт ҡуйып ултырмай. Бары тик парлашыу мәле етһә генә ата ҡош ҡыу ағастың осона ултырып, суҡышы менән "барабан" һуға башлай. Был тауыш тирә-яҡҡа тарала. Ата тумыртҡа үҙе тураһындағы мәғлүмәтте тирә- йүнгә ошолай таратып ултыра. Тәбиғәттә барыһы ла уйлап эшләнгән шул - эргә-тирәләге кейәүгә сығырға әҙерләнеп йөрөгән "апай" тумыртҡалар "ағай" тумыртҡаның көсөн һәм ҡеүәтен ошо "барабан" тауышына ҡарап билдәләй ҙә инде. "Барабан" тауышы мөсһөҙ булһа, ата тумыртҡа ғаиләһеҙ тороп ҡалыуы ла бик мөмкин.

Ошо ерҙә Салауат Әбүзәрҙең ижадына күҙ һалайыҡ әле.

*Тумыртҡа түгелһең,*
*Йөрәк,*
*Серегән, тип,*
*Күп нәмә,*
*Ҡортон таҙартырға*
*Теләп,*
*Үҙеңә ҡорт*
*Сүпләмә.*

Күреп тораһығыҙ, Салауат Әбүзәр, сама бел, бушҡа ярһып, барабан булма, тип кәңәш бирә. Минеңсә, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк бар. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: халыҡ телендә лә ҡара тумыртҡаға бәйле, бигерәк тә уның "барабанына" бәйле, бик тапҡыр әйтем бар. Күп һөйләп, аҙ эшләгән кешене беҙ, ярыҡ барабан, тип атайбыҙ. Ә бына ҡайһы берәүҙәрен хатта, буш барабан, тип тә ебәрәбеҙ. Минең уйымса, былар бик тапҡыр әйтемдәр.

Бына ошолай парлашыу мәлдәре үтә, йәш ғаиләләр барлыҡҡа килә. Өй төҙөү мәшәҡәте күберәк ата тумыртҡаға төшә. Ул ағас олонон соҡоп, шунда оя эшләй. Инә тумыртҡа өс-биш йомортҡа һала. Бала ҡарау тулыһынса әсәй елкәһендә була. Йомортҡа баҫыу осоронда ул, ниндәй генә бәлә килеүгә ҡарамаҫтан, урынынан ҡуҙғалмай. Ҡара тумыртҡала әсәлек тойғоһо бик көслө. Ә инде йәш быуынды улар икәүләп ашата.

Ошоларҙы уйлап торған мәлдә ҡапыл ҡолаҡҡа тумыртҡа балаһының тауышы салынды. Иплəп кенә урман буйлап, тауыш килгән яҡҡа ыңлайланым. Минең ниәт - ошо тумыртҡа балаларын күреү инде. Әйтергә кәрәк, урманда ҡош ояһы табыуы еңелдән түгел. Ә шулай ҙа мин тыңлай-тыңлай барып, барыбер ҡара тумыртҡаның ояһын таптым бит, әй. Оя имән олононда икән. Бала тумыртҡа мине күреп йәшенә лә ҡуя. Ә шулай ҙа башын ғына сығарып, миңә ҡарап-ҡарап ала **(фото)**. Күреп тораһығыҙ, уны таныуы бер ҙә ҡыйын түгел. Башҡа тумыртҡаларҙан айырмалы рәүештә, ҡара тумыртҡа башына ҡыҙыл "түбәтәй" кейеп алған.



Бына ошо ҡара тумыртҡа ҡайһы ваҡыт солоҡ ҡорттарына бер аҙ зыян килтерә. Бал ҡорттарын ашай ул. Бына әле ул түмәр умартаны тишеп ташлаған **(фото)**. Солоҡсо ваҡытында күреп ҡалып, тәүге тишекте ағас менән көпләп ҡуйған. Әммә ҡара тумыртҡа йыбанмаған, эргәһенән тағы бер тишек тишкән. Шуға күрә солоҡсо был бал ҡорто ояһын ҡотҡара алмаған. Нишләйһең, тәбиғәттә йәшәү ҡанундары ҡаты, унда тормош ошолай дауам итә инде...



Бына әле тумыртҡа балаһына ҡарап, уйлап торам: беҙ киләсәк быуын өсөн ҡулдан килгәнсе урмандарыбыҙҙы һаҡлаһаҡ ине, ошо тумыртҡа балаһына үҫеп етеп, оҙаҡ йылдар буйы көслө итеп "барабан" һуғып ултырырға насип итһә ине, бары тик беҙ генә, кешеләрҙе әйтәм, ярыҡ барабан йә буш барабан ҡушаматтары алып йәшәмәһәк ине...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




**Һәр кешенең үҙ яҙмышы, донъяға үҙ ҡарашы. Берәүҙәр диндар, икенселәр дингә ышанмай. Тап атеистар: "Туҡыманы туҡыусы эшләгән, һүрәтте рәссәм яһаған, скульптураны күреп, уның авторы кем икәнлеген белмәһәк тә, уның үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәгәнен аңлайбыҙ. Логика буйынса, йыһанды Алла барлыҡҡа килтергән, ти. Тик Алла үҙе ҡайҙан барлыҡҡа килгән?" - тип тылҡый.**

Алла - Барлыҡҡа килтереүсе, Яратыусы. Уны кем барлыҡҡа килтергән, тип һорау үҙе үк урынһыҙ, мәғәнәһеҙ. Барлыҡҡа килтереүсе Үҙенең барлыҡҡа килтереү закондарына буйһонмай. Логика законы - ул беҙҙең закон, кешеләр, ваҡыт һәм урын законы.

Ваҡытты һәм урынды яратҡан Алла быларҙың барыһынан да юғары, йәғни урын һәм ваҡыт закондарына буйһонмай. Уны ваҡыт, урын һәм уларҙың закондары менән бәйле итеп күҙ алдына килтереп булмай.

Немец философы Иммануил Кант үҙенең "Саф аҡыл ҡапма-ҡаршылығы" тигән китабында: "Кеше аҡылы, асылда, ғилемдең икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрен төшөнөп бөтөрлөк камилдә түгел; ысынында иһә, аҡыл әйберҙәрҙе һәм күренештәрҙе өлөшләтә генә аңлар өсөн булдырылған. Ул Алланың барлығы кеүек, бөтә нәмәне эсенә алыусы төшөнсәне аңлай алмай", - ти. Ләкин беҙ Алланы аҡылыбыҙ менән түгел, ә күңелебеҙ менән аңлайбыҙ. Беҙҙең ғәҙеллеккә ынтылышыбыҙ - һыу эске килеү һыуҙың барлығын раҫлағандай, ғәҙеллектең булыуына дәлилебеҙ. Ерҙә ғәҙеллек булмаһа ла, ул тантана итергә тейеш, ә был тик теге донъяла, ғәҙел хөкөмдар булған ерҙә генә мөмкин.

Логика фәненә нигеҙ һалыусы боронғо грек философы Аристотель сәбәптәрҙең күп, эҙмә-эҙлекле булыуына ғәжәп ҡыла. Әйтәйек, ултырғысты таҡтанан эшләйҙәр, таҡтаны ағастан әҙерләйҙәр, ағас орлоҡтан үҫә, ә орлоҡ сәсеүсе тарафынан барлыҡҡа килтерелә... Был эҙмә-эҙлелек ваҡыт эсендә сикһеҙ, ул башҡа сәбәпкә мохтаж булмаған тәүге сығанаҡҡа килтерергә, йәғни Барлыҡҡа килтереүсегә ихтыяж кисермәгән тәүге Барлыҡҡа килтереүсегә этәрергә тейеш, ә был тап Алла үҙе инде.

Алла үҙенең хикмәтле һүҙендә:

- Дәлил Минең тарафтан эшләнә, ә Миңә дәлил юҡ, - тигән.

Был беҙҙең булыуыбыҙға, ерҙең, ҡояштың, йондоҙҙарҙың, айҙың булыуына Алла дәлил булып тора, тигән һүҙ. Алла ерҙәге барлыҡ нәмәләрҙе иҫбатлаусы. Ҡөрьән: "Алла - бер, Алла мәңгелек, Ул берәүҙән дә тыумаған һәм берәүҙе лә тыуҙырмай, Уға тиңләшерлек берәү ҙә юҡ", - тип әйтеп, беҙҙе бөтә бәхәстәрҙән ҡурсалай.

Алланың бер булыуы фәнни нигеҙҙә лә раҫлана: Яратыусы, тимәк, Алла, бер, сөнки бөтә донъя бер материалдан тора һәм бер план буйынса төҙөлгән. Водородтан "ассимиляция" һәм атом энергияһын файҙаланыу ысулы менән Менделеев таблицаһындағы 92 элемент барлыҡҡа килгән. Ошо уҡ водород менән күктәге йондоҙҙар балҡый, йыһан өҫтөндә ҡояш яҡтыра. Бөтә тормош углеводородтың химик ҡушылмаларынан барлыҡҡа килтерелгән, сөнки тереклек һәм үҫемлектәрҙең бөтә төрҙәре, янғас, күмергә әйләнә.

Ниндәй генә йән эйәһен алма, тәлмәрйенме, ҡуян, күгәрсен, жираф, крокодилмы, бөтәһенең дә берҙәй анатомик план буйынса төҙөлөүе раҫлана, уларҙың һәр береһе күреү, ишетеү, һиҙеү һәләтенә эйә, һәр береһенең һөлдәһе бар, артериялары, ҡан тамырҙары, йөрәк камералары, һөйәк, мускулдары берҙәй.

Үҫемлектәр, хайуандар һәм микроорганизмдар донъяһы ни тиклем күп төрлө булмаһын, уларҙың төҙөлөшө берҙәй булыуының сәбәбе бөтә организмдарҙың төҙөлөш һәм үҫеш нигеҙендә биологик структура берәмеге - күҙәнәк ятыуына ҡайтып ҡала. Уларҙың барыһы ла тын ала, үлә, тыуа, үрсей. Сөнки быларҙың бөтәһен дә Яратыусы бер.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Перспективалы күҙаллау: нимә күрәһегеҙ, шуға ғына өлгәшә алаҫаҡһығыҙ**

"Кем мөмкинлекте уның ысынбарлыҡҡа әүерелеүенән алда күрә белә - киләсәк шулар ҡулында", - тигән Джон Скалли.

Перспективалы күҙаллау - лидер өсөн бөтөн нәмә. Ул мотлаҡ кәрәк. Ни өсөн? Сөнки ул үҙе артынан лидерҙы алға әйҙәй, маҡсатты сағыу төҫтәргә мансый. Ул лидер эсендә янған усаҡҡа утын өҫтәп тора, осҡондар сәсрәтә һәм алға саҡыра. Шулай уҡ ул лидер артынан эйәреүселәр өсөн дә маяҡ булып тора. Миңә перспективалы күҙаллауы булмаған лидерҙы күрһәтегеҙ, һәм мин һеҙгә ғәмәлдә бер ҡайҙа ла хәрәкәт итмәгән кешене күрһәтермен. Иң яҡшы осраҡта ул түңәрәк буйлап әйләнә. Перспективалы күҙаллауҙың нимә икәнен аңлау һәм уның нисек итеп яҡшы лидерҙың тормошонон айырып алғыһыҙ өлөшөнә әүерелеүен яҡшыраҡ аңлар өсөн түбәндәгеләрҙе яҡшы үҙләштерергә кәрәк:

**Перспективалы күҙаллау булмыштан килә.** Перспективалы күҙаллауҙы һатып та, кемдәндер бурысҡа ла, һорап та алып булмай. Ул кешенең булмышынан килергә тейеш. Әгәр алыҫтағы перспективағыҙҙы күҙаллау һәләте етешмәй икән, асылығыҙға күҙ һалығыҙ. Унан тәбиғи һәләттәрегеҙҙе һәм теләктәрегеҙҙе тартып сығарығыҙ. Һәләтегеҙгә мөрәжәғәт итегеҙ. Шул ваҡытта ла үҙегеҙҙең күҙалауығыҙ юҡ икән, лидерҙың күҙаллауына ҡушылығыҙ, сөнки уның күҙаллауы һеҙҙекенә ауаздаш. Уның партнерына әүерелегеҙ.

**Перспективалы күҙаллау һеҙҙең үткәндәрегеҙҙән килә.** Перспективалы күҙаллау ниндәйҙер мөғжизәле сифат түгел. Ул лидерҙың үткән биографияһынан һәм уны уратып алған кешеләрҙең тарихынан үҫеп сыға. Теләһә ниндәй лидер менән һөйләшегеҙ, улар һеҙгә үткән тормоштарындағы перспективалы күҙаллауҙы формалаштырыусы ниндәйҙер мөһим ваҡиғаны мәғлүм итәсәк.

**Лидерҙың перспективалы күҙаллауы башҡаларҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә.** Ысын күҙаллау алдағыны күреүгә һәм етди эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Ул бер кешенең хәленән килгән сиктәрҙе үтеүе ихтимал. Әгәр ул ысын ҡимməткә эйә икән, башҡаларҙы ылыҡтырып һәм йәлеп итеп кенә ҡалмай, уларҙың тормошона өҫтәмә мәғәнә, ҡиммәт өҫтәй.

**Перспективалы күҙаллау барлыҡ ресурстарҙы тупларға ярҙам итә.** Перспективалы күҙаллауҙың иң ҙур ҡиммәттәренең береһе - ул магнит кеүек кешеләрҙе тарта, уята һәм берләштерә. Ул шулай уҡ финанстарҙы һәм башҡа ресурстарҙы ла бергә туплай. Күҙаллау ни тиклем ҙурыраҡ икән, ул шул тиклем күберәк еңеүселәрҙе ылыҡтыра ала. Перспективалы күҙаллау ни тиклем ылыҡтырғыс, уны тормошҡа ашырырға теләүселәр шул тиклем ныҡышмал була.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 17 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское".
17.00, 02.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Чудотворец". 1-я и 2-я серии. Драматический сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 "Познер" (16+).
00.55 Ночные новости.
01.10 "Измена". Сериал (18+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время".

### РОССИЯ 1

